✓ *Тормош уйын һымаҡ: кемдәрҙер уға ярышырға, кемдер һатыулашырға, ә иң бәхетлеләр тамаша ҡылырға килә.*

*(Пифагор).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20 - 26 ИЮЛЬ - (МАЙАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№29 (551)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

### Кеше һүҙе...

кеше үлтерә



3

### Буласаҡ дипломатҡа ла...

башҡорт теле кәрәк булыуы бар





5

### Ә бит ирҙәр сисенмәне...



6

### Әйберләтә яҙма, ҡош теле...



8-9 Халҡыбыҙҙың иң боронғо яҙмалары

14 ТВ-программа

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**Ауылда хәҙер кеше үҙ ҡулдары менән наҙлап-хәстәрләп үҫтергән, етештергән аҙыҡ-түлек ҡалмай килә һымаҡ: себештәрҙе - инкубаторҙан, йомортҡа, икмәк-һөт ризыҡтарын, хатта ки картуфына тиклем магазиндан һатып алыуҙы хуп күрәләр. Бындай хәлде нисек аңларға?**

***Салауат МӨХӘМӘТШИН, Баймаҡ районы Холсора ауылы:*** Ауыл йәшәй, Аллаға шөкөр! Әммә кешенең төрлөһө бар инде. Әле бына үҙебеҙ майҙан тултырып картуф сәстек, мул уңыш алып, ҡыуанырға насип булһын. Һеҙ әйткән күренештәр беҙҙең ауылға хас тип әйтә алмайым. Халыҡ матур, етеш йәшәргә тырыша, күпләп мал аҫырай. Беҙҙең яҡтың ите бик үтемле, сөнки бесәнебеҙ шау сәскә генә. Ялан яғыныҡын яратмай, тәмле һәм сифатлы тип, итте беҙҙән килеп һатып алалар. Көтөүлек, бесәнлек проблема түгел. Пайҙарыбыҙҙы алдыҡ, бер нисә кеше төркөмләшеп еребеҙҙе кәртәләнек тә, рәхәтләнеп бесән эшләйбеҙ. Пай ерҙәренә ашлыҡ, иген сәсеп үҫтереүселәр ҙә бар. Ҡайһылыр районда сәсергә картуфтары ла юҡ икән, тип ишеткәйнем ишетеүгә. Беҙҙә сәсергә орлоҡ таба алмай аптырап йөрөгән кешене осратҡаным юҡ әлегә һәм булмаҫ та, сөнки беҙҙең төбәктә ғүмер буйы эшләп өйрәнгән уңған кешеләр йәшәй.

***Камила БАЯЗИТОВА, Әлшәй районы Ибрай ауылы:*** Беҙҙең ауылда халыҡ малды шул тиклем күп тота, сөнки ана шул мал көсө менән донъя көтөп торалар. Һыйыр малын өй һайын өс баштан да кәм аҫырамайҙар, хатта 10-12-шәр һыйыр, 5-6 баш йылҡы, тиҫтәләгән ваҡ мал тотҡан егәрлеләр ҙә бар. Ғөмүмән, ауылда ат тотмаған кеше юҡтыр ҙа әле. Йәш үләнгә баҫыу менән, күпертеп ҡымыҙын да бешә башлайҙар. Һөт аҙыҡтары: ҡаймаҡ-майын, эремсек-ҡоротон туранан-тура Өфө баҙарына алып барып һаталар, аҡса эшләйҙәр. Ауылда эш юҡ, тип, түшәмгә төкөрөп ятыусылар юҡ беҙҙә шуның өсөн дә. Күршемдә йәшәгән ир-егет, яңғыҙы тормош көтөүгә ҡарамаҫтан, ат, 4-5 һыйыр, тиҫтәләгән һарыҡ аҫырай, умарта тота. Шундай ауылдаштарым барҙа, афарин тиергә генә ҡала үҙҙәренә!

***Динара КОТЛОБАЕВА, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылы:*** Хәлдәр төрлө ерҙә төрлөсәлер, тип уйлайым. Бар, әлбиттә, һәр ауылда ла мал тотмайынса, аҙыҡ-түлекте магазиндан ғына һатып алып йәшәүселәр. Уларҙы бының өсөн һис кенә лә ғәйепләп булмай. Аҡсаһы бар икән - нимә теләй, шуны һатып алырға хоҡуғы бар. Мал тотмау сәбәптәре лә төрлөсә булыуы ихтимал бит әле: сәләмәтлеге буйынса, яңғыҙ йәшәгән ҡатын-ҡыҙ, өлкән йәштәгеләр, әлбиттә, мал ҡарай, уны аҫырай алмай. Ә бына инде ялҡаулығына барып, бер һыйыр, хатта ҡаҙ-тауыҡ та аҫырай алмағандар, тәбиғи, үҙ тамаҡтарын да туйҙыра алмай. Үҙ ағың, ит-майың - үҙеңдеке инде ул, һатып алған күпмегә генә етә? Ә шулай ҙа, уйлап ҡараһаң, бесән эшләүгә, унан ҡала фуражын һатып алыуға киткән аҡсаңа интекмәй генә бар ҙа һатып ал магазиндан, тип уйлайҙыр ҡайһы берәүҙәр һәм улар үҙҙәренсә хаҡлы булыр, сөнки көтөүлек, бесәнлек беҙҙә ҙур проблема. Өҫтәүенә, көс түгеп аҫыраған малың юғала. Шунан көнөң әлеге магазинға тороп ҡала инде...

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ШАҒИР ҺҮҘЕ





## БЕР ҠЫЛ

Бер көн килеп боронғо бер дуҫым
Бөрөп алды шулай алҡымдан:
"Паганини ҙа бит түгелһең, - ти, -
Тик уйнайһың һаман бер ҡылда!
Ил дә тел тип ылғый ҡаңғырмаһы,
Ҡалдырсы шул иҫке бер ҡылды! "
Тигән һүҙҙән бер дуҫым юҡ булды,
Ҡылым ҡылыс булып тартылды.
Иҫке бер ҡыл - изге бер ҡыл йәнгә!..
Ул тартылған сәсән халҡымдан.
Бер көн килеп ул ҡыл өҙөлгәндә
Ни мәғәнә минә ул ҡылдан?
Ҡалһын иҫке йәйғор әҙернәмдә
Мең йыл киргән кереш - бер ҡылым.
Үтеп ингән ул ҡыл йөрәгемә
Бөйөк халҡым ҡулы арҡылы!
Пушкин, Кобзарь, Туҡай, Бабичка ла -
Һәр халыҡҡа изге бер ҡыл ул,
Йондоҙҙарға яңы уҡ сөйөргә
Зыңлап торған һиҙгер аҡыл ул.
Мәңге яңы яҡты был донъяла
Бер йөрәгем типкән сағында
Ике йөҙлө, ике һүҙле булмам,
Күҙ ҙә йоммам бер ҡыл һыңғанда.
Бер тыуғанмын икән, бер үлермен,
Тәүге һөйөүем дә бер генә.
Бер генә тик изге туған телем,
Бер генә тик тыуған ер генәм!..
Харам миңә уңыш күкрәк һөтө,
Харам миңә бишек йырҙары,
Харам миңә һөйөү, күҙ йәштәре,
Ҡош һайрауы, ҡояш нурҙары!
Йөҙгә бәрәү тулмаҫ ҡылың менән
Бергә китһен кәнәш-аҡылың.
Тукһан туғыҙ ялған ҡыл үргәнсе,
Торһон әйҙә ысын бер ҡылым!..

*1972 йыл.*

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# АТА-БАБА ШӨҒӨЛӨ...

## килем дә килтерә



**Аҡса табыу әмәлдәре бихисап хәҙер. Бигерәк тә ауыл ерендә йәшәгәндәргә. Бары ул әмәлдәрҙе күрә белергә һәм, иң мөһиме, ялҡауланмаҫҡа кәрәк.**

Үҙемә килгәндә, ниндәйҙер алыпһатарлыҡ менән түгел, етештереү менән бәйле йүнәлештәрҙең әһәмиәте ҙур, тип уйлайым. Етештерелгән тауарҙың килем генә түгел, йәмғиәткә файҙа ла килтереүе мөһим. Беҙҙең заманда иң отошлоһо - үҙ эшеңде булдырыу. Мәшәҡәтле булһа ла, үҙ-үҙеңә эшләгәндә барыбер хеҙмәтеңдән оло кинәнес алаһың.

Беҙҙең ғаилә 90-сы йылдарҙан алып фермерлыҡ эше менән шөғөлләнә. Төрлө йылдарҙа бойҙай, һоло, ҡарабойҙай, картуф, кәбеҫтә үҫтерҙек. 2003 йылда бер нисә йылҡы малы алып, уларҙы үрсетә башланыҡ. Былтыр мин шәхси хужалығымды ойоштторҙом, ғаиләмдең шөғөлөн үҙ итеп, йылҡысылыҡ менән шөғөлләнә башланым. Әлеге мәлдә әсәйем менән икебеҙҙең 41 баш йылҡыбыҙ бар. Башлыса бар эштәрҙе ғаилә ағзаларыбыҙ башҡара. Төп эш әсәйемә, миңә, һеңлемә төшә. Бесән мәлендә туғандар ҙа ярҙам итә. Бесәнлек һәм көтөүлөк өсөн яҡын-тирәлә ҡуртымға ер алдыҡ.

Ҡымыҙға заказдар күп. Шуға күрә лә тауарыбыҙҙы магазиндарға сығарыу кәрәген әле күрмәйбеҙ. Тулыһынса йорттан тороп һатып бөтөрәбеҙ. Ләкин яҡын киләсәктә Шишмәлә ҡымыҙ йорто асырға ла планлаштырабыҙ.

Быйыл Ырымбур дәүләт университетын тамамланым. Һөнәрем аҙыҡ технологиялары менән бәйле. Йылҡысылыҡ, ҡымыҙ эшләү менән ныҡлап шөғөлләнә башлаһам, алған белемемдең ярҙамы тейәсәк, тип уйлайым. Тағы ла университетта уҡығанда өҫтәмә белем алыу мөмкинлеге лә булды. Европа стандарттары буйынса алған сифат сертификатым фермер-малсылыҡ эшендә лә, ауыл хужалығы һәм аҙыҡ сәнәғәте менән бәйле өлкәләрҙә лә кәрәкле буласаҡ.

Ат үрсетеү, ҡымыҙ һатыу беҙҙең яҡ өсөн отошло йүнәлеш. Тәбиғәт шарттары ла уңай, бесән, көтөүлөк өсөн ер ҙә етерлек. Һыйыр малына килгәндә, уның лейкоз ауырыуы менән сирләп китеү хәүефе ҙур. Белеүегеҙсә, был ауырыу һөт аша кешегә лә йоғоп, яман шешкә килтереүе мөмкин. Аттарға был ауырыу янамай. Әлбиттә, йылҡы малының үҙ сирҙәре лә бар, ләкин прививкаларҙы ваҡытында эшләп торһаң, борсолмаҫҡа була.

Ат ҡарау еңел түгел. Үҙ нескәлектәре лә етерлек. Әммә ҡыйын тип, бер ни эшләмәй өйҙә генә ятһаң, ниндәйҙер мөғжизәгә ышанып ҡул ҡаушарып ултырһаң, бер нәмәгә лә өлгәшеп булмай. Хәрәкәт итергә кәрәк, эҙләргә кәрәк, эшләргә кәрәк. Шул ваҡытта ғына уңыш, финанс яҡтан бойһондороҡһоҙлоҡ килә.

**Гөлсәсәк БИРҒӘЛИНА.**
**Шишмә районы Ҡараяҡуп ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Ауылда хәҙер кеше үҙ ҡулдары менән наҙлап-хәстәрләп үҫтергән, етештергән аҙыҡ-түлек ҡалмай килә һымаҡ: себештәрҙе - инкубаторҙан, йомортҡа, икмәк-һөт ризыҡтарын, хатта ки картуфына тиклем магазиндан һатып алыуҙы хуп күрәләр. Бындай хәлде нисек аңларға?*

(Башы 1-се биттә).

*Гүзәл БАЙМЫРҘИНА, Өфө ҡалаһы:* Май байрамына ауылға ҡайтҡайным, бала саҡты иҫкә төшөрөп, элекке ауылды һағынып, эсем бошоп килеп йығылдым баш ҡалаға. Уҡып-ишетеп беләм: заманалар ҡатмарлы булһа ла, бирешмәй, мал аҫырап, баҡса үҫтереп, матур итеп донъя көткән ауылдарыбыҙ бар, шөкөр. Ә бына мин үҙемдең тыуған ауылымда бер ниндәй ҙә алға китеш, күтәрелеш һиҙелмәй, киреһенсә, кире яҡҡа ғына бара тип әйтерлек. Ил менән эскелеккә ҡаршы яу барғанда, аңлы ауылдарыбыҙ уға дәррәү булмаһа ла, ярайһы әүҙем ҡушыла барғанда, минең ауылымда ошо айыҡлыҡ хәрәкәте тураһында ишеткәндәре лә юҡтыр, тип уйларға була, сөнки ауыл тулы эшһеҙ, эскесе ир-ат йөрөты. Пенсионерҙарҙан аҡса теләнселәү бөтә "эштәре". Ҡустым менән киленгә картуф ултыртам тип ҡайтыуым бушҡа ғына булды: ҡустым мин киткәнсе айыға алмай ятып ҡалды, ә килен, меҫкен, әхирәте менән күрше урыҫ ауылына барып, картуф һатып алырға йыйынып тороп ҡалды. Өфөнән үҙем менән йомшаҡ икмәк, һөт алып ҡайтмағаныма үкендем. Сәй эсергә ултырғайныҡ, һөт юҡ. Һөтһеҙ ҙә эсергә булыр ине, икмәге иҫкергән: байрамда магазинға икмәк килтермәйҙәр икән... Шаҡлатып ҡоймаҡ ҡоя һалып та алыр инең - һөт булһа, тик йомортҡаны ла магазиндан барып алырға кәрәк икән. Килен инкубатор тауыҡтарын ит өсөн генә тота, улар йомортҡа һалмай. Ҡаҙ бәпкәләрен дә инкубаторҙан ала. Өйҙә мейескә икмәк һалмағас, оно ла ҡалмаған. Шул саҡ әсәйемдең мейес тултырып ҡабарып торған хуш еҫле икмәк бешереүҙәре, тауыҡ, ҡаҙ баҫтырыуы, моронлаған йомортҡаларҙы бәпләпнаҙлап, иҫке мамыҡ шәлгә төрөп, кәпәскә һалып, төндәрен тороп ҡарай-ҡарай себештәр сығарып алыуы иҫемә төшөп китте. "Мәшәҡәте күп булһа ла, үҙеңдеке - хәләл, ите татлы", ти ине әсәйем. Үкенес, хәҙерге килендәр әсетеп икмәк һала ла, ҡорот ҡайната ла белмәй генә түгел, теләмәй ҙә. Бөтәһе лә әҙер бит - ниңә интегергә?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Быйылғы йылдың икенсе яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу тамамланды ла, июлдән ул яңынан башланды. Йәғни август аҙағына тиклем уҡыусыларыбыҙға 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн 2013 йылғы хаҡтар менән, йәғни 378 һум 36 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Сентябрҙән хаҡтар үҙгәрәсәк.**

● Шулай итеп, июль айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● **Әйткәндәй**, 2013 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға әле лә һуң түгел: 17 июлгә тиклем яҙылһағыҙ - августан, 17 августҡа тиклем яҙылһағыҙ, гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башларһығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Яңауыл районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан аграрийҙары өсөн ҡыҙыу осор дауам итә. Малға аҙыҡ әҙерләү менән бер рәттән, күпселек районда ҡышҡы культураларҙы сабыу башланды. Әле 19,5 мең гектар майҙанда ужым сабылған, был пландың 4 процентын тәшкил итә. 12 районда иген һуғыу эштәре башланды, Дүртөйлө, Илеш, Кушнаренко, Көйөргәҙе, Стәрлетамаҡ һәм Өфө райондарында ҡуҙаҡлылар һуғыла. Республикала 598 мең тонна бесән, 1043 мең тонна сенаж әҙерләнгән. 16 район бесән эшләү планын тулыһынса үтәгән. Малға аҙыҡ әҙерләү буйынса иң юғары күрһәткестәр Бөрө, Благовещен, Ҡалтасы, Краснокама, Яңауыл райондарында.

✓ Башҡортостан "Китап" нәшриәте электрон китаптар өсөн түләүҙең универсаль системаһын яйға һалды. Хәҙер китап һөйөүселәр PayMaster түләү шлюзы тәҡдим иткән системаларҙың береһе - WebMoney, Альфа-банк, ВТБ24, Русский стандарт, Яндекс.Деньги, Промсвязьбанк, Евросеть/Связной, Visa йәки MasterCard банк карталары һәм QIWI-кошелек аша түләй ала. Китапты күсереп алыу өсөн бер һылтанма уртаса 15-25 һум тора. Тулыраҡ мәғлүмәт нәшриәттең сайтында.

✓ Өфөнөң Киров урамында урынлашҡан БР Фәндәр академияһының күргәҙмәләр үҙәгендә "Мәктәп осоро - 2013" күргәҙмә-йәрминкәһе ишектәрен асты. Унда мәктәп формаһы, уҡыу кәрәк-яраҡтары һәм башҡа төр балалар тауарҙары индустрияһын етештереү менән шөғөлләнеүсе еңел сәнәғәт предприятиелары, эшҡыуарҙар үҙҙәренең тауарҙарын тәҡдим итә. Улар араһында Стәрлетамаҡтың "Одежда" фабрикаһы, Ишембай трикотаж әйберҙәр фабрикаһы, Ишембай ойоҡ фабрикаһы, "Башҡорт ғилми-академик китап" ойошмалары ла бар. Күргәҙмә август аҙағына тиклем эшләй.

✓ Үҙәк хәрби округта яҙғы саҡырылыш тамамланды. Хәрби комиссариаттар яҡынса 65 мең гражданды хәрби хеҙмәткә оҙатты. Башҡортостандан 6 мең һалдат әрме хеҙмәтен үтәйәсәк. Һалдаттарҙың 21 меңе Үҙәк округтың хәрби частары урынлашҡан төбәктәрҙә, 5 меңе Рәсәй Эске эштәр министрлығының эске ғәскәрҙәрендә, 4 меңгә яҡыны стратегик тәғәйенләнешле ракета ғәскәрҙәрендә, 3 меңгә яҡыны Һауа-десант ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итәсәк.

***✓ Ни өсөн фәҡәт ошо бер әрмәнде генә маҡсатына өлгәшә алған һуң? Баҡтиһәң, ул һаңғырау булған икән. Ул "мөмкин түгел" тигән һүҙҙе, кирегә өгөтләүҙәрҙе бөтөнләй ишетмәгән һәм маҡсатына өлгәшә алған...***

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# КЕШЕ ҺҮҘЕ...

## кеше үлтерә

**Был әйтемдең әллә күпме варианттары, мәғәнә оҡшашлығы буйынса игеҙәк-һыңарҙары бар. Уларҙың бер нисәүһе: "Ағас башын ел бора, әҙәм башын һүҙ бора", "Кеше ышанмаҫтай хәбәрҙе ысын булһа ла һөйләмә", "Әйткән һүҙ - атҡан уҡ", "Кеше һүҙе юлдан яҙҙыра", "Кешенең әйткәнен тыңла, үҙеңдекен эшлә", "Тартай теленән таба", "Ауыҙ - ҡапҡа, һүҙ - ел", "Башҡа бәлә - телдән", "Белмәгән, күрмәгән - мең бәләнән ҡотолған", "Бәләне әҙәм - теленән, хайуан мөгөҙөнән таба", "Күп бел, аҙ һөйлә", "Күп һөйләгән кешелә өмөт юҡ", "Телдең һөйәге юҡ", "Уйламай һөйләгән - ауырымай үлгән" һ.б.**



Бер мәлде һаҙлыҡ халҡын тәшкил итеүсе әрмәнделәр менән баҡалар бер түңгәк өҫтөнә йыйылышып, бәхәс ҡороп ебәргәндәр, ти. Әңгәмәләре үҙҙәре көн иткән биләмәлә йәшәү шарттарының үтә лә насар булыуы хаҡында икән.

- Беҙгә бында йәшәүе бик ауырлашты, көндән-көн халҡыбыҙ һаны йылдам арта. Тиҙҙән аяҡ баҫырға ла урын ҡалмай башлаясаҡ. Бына күршелә генә яҡтан һаҙлыҡ ҙур, шунда ғына барып йәшәгәндә, бында тонсоғоп ятҡансы, - тип баҡылдай-баҡылдай һүҙ башлап ебәргән йәш әрмәнде.

- Ә бына мин анау тауҙар итәгендә бик яҡшы, бик ғәжәйеп урындар барлығы хаҡында ишеттем. Унда бындағы кеүек һаҫыҡ һаҙлыҡ та, беҙҙең затҡа ел өрөп тултырыусы хулиган малайҙар ҙа юҡ. Үтәнәнүтә күренмәле, төбө күренеп ятҡан тап-таҙа һыулы быуа, һулап туйғыһыҙ саф һауа, - тип уның һүҙен икенсе бер әрмәнде күтәреп алған. Уның туҡтауһыҙ баҡылдаған ауыҙына башҡаларҙың күҙ-ҡарашы ла эйәреп өлгөрмәгән, ти.

- Булһа һуң ундай урындар, тапҡанһығыҙ ожмахтың үҙен, - тип уларға ҡаршы төшкән оло йәштәге баҡа. -Һеҙ барыбер ҙә ул ерҙәргә барып етә алмаясаҡһығыҙ бит...

- Нишләп барып етмәй, ти. Беҙҙең халыҡ һәр бер эште булдыра ала. Теләк кенә кәрәк. Шулай бит, туғандар? - тигән хыялланырға ятыусы урта йәштәрҙәге әрмәнде, туҡтауһыҙ асылып ябылған ауыҙына һүҙҙәрен саҡ-саҡ өлгөртөп. - Әйҙәгеҙ, йәштәр, ололарға үҙебеҙҙең нимәгә һәләтле икәнебеҙҙе күрһәтәйек...

- Әйҙәгеҙ, беҙ риза. Ҡарттарса боронғоса йәшәргә теләмәгәндәр беҙҙең арттан эйәрһен. Әйҙәгеҙ, таҙа һыулы быуаға күсәбеҙ, - тип йәштәрҙе башҡа йәш әрмәнделәр һәм баҡалар күтәреп алған.

Барлыҡ һаҙлыҡ халҡы, шулай итеп, яңы урынға күсенергә әҙерләнә-төйнәнә башлаған. Өлкән йәштәге пессимистар, аҡһаҡ-туҡһаҡтар оло баҡа янына йыйылған. Был ваҡытта оло баҡа һаҙлыҡтағыларға йәштәрҙең бойомға ашмаҫ хыялы хаҡында хәбәр һатып баҡылдаған. Был юл менән ул тегеләрҙең дәртен һүрелдерергә теләгән. Йәштәр юлға йыйынып бөтөп, китергә сыҡҡас, ололар бер тауышҡа уларҙың артынан ҡысҡырып ҡалған:

- Ҡайҙа киттегеҙ, хыялыйҙар. Бына күрегеҙ ҙә тороғоҙ, берегеҙ ҙә ул урынға барып етә алмайынса кире боролаcаҡһығыҙ. Имеш, берәүҙәр Америка аса...

Әммә йәш әрмәнделәр уларҙың һүҙенә иғтибар ҙа итмәйенсә, үҙ юлында булған. Бер көн барғандар, ике көн, өс көн... Дүртенсе көндә хәлдәре бөтә башлаған әрмәнделәр берәм-берәм кире боролоп, өйрәнгән һаҙлыҡтарына әйләнеп ҡайта башлаған. Уларҙың үҙ маҡсатынан баш тартып, кире боролоуына юлда осрап кәңәш биреүселәр ҙә ныҡ йоғонто яһаған. Улар барыһы ла йәштәрҙе был ниәттән кирегә өгөтләгән. Шулай итеп, көндән-көн йәштәрҙең төркөмө кәмегәндән-кәмей барған. Уларҙың дәртен һүрелдерергә теләп, баҡылдай-баҡылдай оҙатып ҡалыусы ололарҙың, шулай итеп, ниәттәре бойомға ашҡан. Иң һуңынан бары тик бер ныҡыш әрмәнде генә тау башына менеп етеп, таҙа һыулы быуаға барып йәшәй башлаған.

Ни өсөн фәҡәт ошо бер әрмәнде генә маҡсатына өлгәшә алған һуң? Әллә уның ихтыяры башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ булғанмы? Юҡ, баҡтиһәң, ул һаңғырау булған икән. Ул "мөмкин түгел" тигән һүҙҙе, кирегә өгөтләүҙәрҙе бөтөнләй ишетмәгән һәм тик шуның арҡаһында ғына маҡсатына өлгәшә алған...

Кеше һүҙенең кешенең үҙен генә түгел, уның өмөттәрен, хыялдарын үлтереүҙең, юҡҡа сығарыуҙың бер миҫалын һүрәтләгән был риүәйәт әрмәнделәр һәм баҡалар тормошонан алынған. Иҫегеҙҙә булһа, беҙ "Ят ярлыҡамай, үҙеңдеке үлтермәй" (2012 йыл, 12-се һан) тигән әйтем хаҡында һүҙ алып барғанда бер япон риүәйәтен миҫал итеп килтергәйнек. Уны ауылдашым, күренекле шағир һәм ғалим, мәрхүм Рәйес Түләк һөйләгәйне.

Ҡыҫҡаса ғына аңлатҡанда, унда ағалы-ҡустылы икәү һунарҙан ҡайтып барғанда ҡапыл дауыл ҡуба һәм һунарсыларҙың кесеһе ҡаяға аҫылынып тороп ҡала. Ҡусты кеше ағаһы, донъя менән хушлаша, ағаһына балаларын ташламауын үтенә, ә ағай кеше, йүгереп ҡайтып йорттан арҡан алып килеп еткәнсе, ҡустыһын сәмләндерергә итеп, уның ҡатыны менән яҡын мөнәсәбәттә йәшәүе, уларҙың балаларының үҙенеке икәне хаҡында әйтә. Был һүҙҙәр ҡаяла саҡ-саҡ аҫылынып торған ҡустыны оторо сәмләндерә һәм ул ағаһы килеп еткәнсе, үҙендә упҡынға осмаҫлыҡ көс таба. Ағай кеше ҡустыһын арҡан менән тартып сығара һәм туғаны өҫкә сыҡҡас, ағаһын упҡынға төртөп йыға. "Мин бит һине бары тик сәмләндерергә генә уйлағайным", тип ҡысҡыра-ҡысҡыра аҫҡа төшөп китә ағай кеше.

Был миҫалда беҙ һүҙҙең кешегә йәшәү көсө, өмөт, сәм бирерлек ҡеүәтен дә, шул уҡ ваҡытта кешене юҡҡа сығарырлыҡ, һәләкәткә илтерлек тәьҫирен дә күрәбеҙ. "Кеше һүҙе кеше үлтерә" әйтеменең классик аңлатмаһы ла был япон хикәйәһенә һалынған. Шулай ҙа бында бер нәмәне аңларға тырышып ҡарайыҡ: ни өсөн фәҡәт кеше һүҙе кеше үлтерә һуң? Бында "кеше һүҙе" һүҙбәйләнешенә ниндәй мәғәнә һалынған? Әлбиттә, һүҙҙе кешенән башҡа бер йән эйәһе лә әйтә алмай, шуға күрә бында "кеше һүҙе"н тура мәғәнәһендә генә түгел, тағы ла өс юҫыҡта ҡарау урынлылыр:

1. Башҡа, сит кешенең һүҙе, мәғәнәһе. Әйтәйек, кеше һүҙенә ышанһаң, үҙ аҡылыңа таянмаһаң, үҙ йөрәгеңде тыңламаһаң, ошо һунарсылар хәленә ҡалаһың инде.

2. Кеше үҙ теленә, үҙ һүҙенә хужа була алмаһа, хәбәрен үлсәмәй һөйләһә, башҡаларға тип осорған һүҙе бумеранг булып кире үҙенә осоп килеп, үҙен һәләкәткә илтеүе мөмкин. Тартай теленән таба, тиҙәр бит.

3. Ғөмүмән, кеше әйткән һүҙҙең ниндәй көскә һәм әһәмиәткә эйә булыуы мәғәнәһе.

Ә бит һүҙҙәр ядро ҡоралынан да ҡурҡынысыраҡ. Уларҙы дөрөҫ итеп ҡулланмау, һаҡһыҙ эш итеү айырым кешеләрҙе генә түгел, тотош кешелекте һәләкәткә алып килеүе бар. Мәғлүмәт быуатында йәшәйбеҙ: һүҙҙәр "сүплегенә" лә батабыҙ, шул уҡ ваҡытта шул һүҙҙәр араһында бар донъяны шартлатыр көскә эйә булғандарын да күрмәйбеҙ...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓БР Экология министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, Көньяҡ Уралдағы тәбиғәт ҡомартҡылары менән танышыу һәм велосипедта, һыу юлы менән, йәйәүләп йә автомобиль менән үтәсәк туристик маршруттар тураһында танышыу өсөн хәҙер ""Весь Южный Урал" интернет-ресурсына инеү ҙә етә.

✓Быйылғы миҙгелдә Башҡортостанда дүрт йылан сағыу осрағы теркәлгән. Бәхетһеҙлек осрағында башлыса ҡара йыланды туҙбаш йылан менән бутаған кеше үҙе ғәйепле. Республикала туҙбаш йыландан тыш ағыулы ҡара йыландар ҙа осрауы тураһында һәр кем белергә тейеш. Эҫе көндәрҙә ҡара йыландың организмы һыуһыҙлыҡтан сарсай, ағыуы һеләгәйендә күпләп туплана, шуға ла уның сағыуы үлемесле булыуы мөмкин.

✓"Роспотребнадзор"ҙың БР идаралығы лабораторияһы Сафронов күпере һәм Сосновое күле районындағы Ҡашҡаҙан һәм Ағиҙел йылғалары һыуы санитар нормаларға тап килмәүен асыҡланы һәм бында пляж ойоштороорға ярамағанлығы тураһында иҫкәртте. Ҡашҡаҙан күле һыуында лямблий паразиттары табылған. Был паразиттар кеше организмына эләгеп, уның бауырын, үт ҡыуығын һәм ашҡаҙан-эсәк трактын зарарлай. Зарарланыу ауыҙ һәм бысраҡ ҡулдар аша йоға.

✓"Роспотребнадзор"ҙың БР идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, был миҙгелдә республиканың дауалау-профилактика учреждениеларына талпандан тешләнгән 9456 кеше мөрәжәғәт иткән, уларҙың 29,2 проценты - балалар. Ошо осорҙа 16 талпан энцефалиты менән зарарланыуы теркәлгән.

✓14 сентябрҙә Өфөнөң Ленин исемендәге майҙанында Музыкаль берҙәмлек көнө (DMC Fest) үтә. "DMC Fest" халыҡ-ара музыка фестивале 2011 йылдан алып ябыҡ бинала, "Өфө уттары" күңел асыу комплексында, үткәрелә ине. Быйыл көҙ ул тәүге тапҡыр асыҡ һауала үтәсәк. Фестиваль 11 сәғәт дауам итәсәк, унда бөтә Рәсәйҙән һәм сит илдәрҙән 20-нән ашыу төркөмдөң сығыш яһауы, йәмғеһе 50 меңгә яҡын кешенең ҡатнашыуы көтөлә.

**"Башинформ"дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КӨНКҮРЕШТӘ ЛӘ... юғары технологиялар кәрәк

**Үткән аҙна баш ҡалала быйыл икенсе тапҡыр ғына үткәрелгән "Инновацион мөхит" юғары технологиялар йәрминкәһе менән үҙенсәлекле булып тарихҡа керҙе. Сөнки заман үҙгәрә, тормошобоҙға яңынан-яңы технологиялар үтеп инә һәм, теләйбеҙме-теләмәйбеҙме, заман менән бергә атларға мәжбүрбеҙ.**

Өфө ҡала округы хакимиәтендә уҙған матбуғат конференцияһы ла тап ошо көнүҙәк темаға арналды. Башҡортостан Республикаһының Фәнгә ярҙам итеү һәм үҫтереү фонды етәксеһе урынбаҫары Сергей Гладких белдереүенсә, юғары технологиялы компаниялар, фәнни ҡараш талап ителгән продукция эшләп сығарыусылар, инновацион бизнес-проекттар, инновацион бизнесты үҫтереү буйынса алдынғы белгестәр, финанс структуралары, власть органдары вәкилдәрен бер урынға туплаған майҙансыҡ булдырыу - заман ихтыяжы. Сөнки яңы ҡарашлы, яңы фекерле, халыҡҡа күрһәтелгән хеҙмәттең үҙкиммәтен кәметергә ярҙам итеүсе технологиялар һәм проекттар тәҡдим итеп мөрәжәғәт итеүселәр аҙ түгел республикабыҙҙа, әммә улар бығаса күпселек осраҡта һөйләшеү этабынан ары китмәгән. Шул уҡ ваҡытта күрше Татарстанда бындай майҙансыҡ булыуы һәм унда инновацион яңылыҡтарға етди иғтибар һәм дәүләт ярҙамы бүленеүе арҡаһында Башҡортостандың бер нисә матур проекты бөгөн күрше өлкәлә тормошҡа ашырыла икән. "Әгәр бер-ике йылда уларға яуап булырлыҡ, атап үтелгән структураларҙың берҙәм диалогын ойошторорлоҡ һәм аныҡ проекттарға ярҙам ҡулы һуҙып, уларҙы тормошҡа ашырылыу берҙәм майҙансыҡ ойоштормаһаҡ, беҙҙәге кадрҙар ситкә китеп бөтәсәк", - тип белдерҙе Сергей Александрович.

"Инновацион мөхит" тап шул маҡсаттан сығып ойошторола ла инде. Уның беренсеһе былтыр уҙғарылып, ни бары 40 ойошма ғына ҡатнашһа, быйыл инде ҡатнашыусылар һаны ике тапҡырҙан ашып китте. Сара программаһының төп маҡсатын "аҡса-кадрҙар-фән" өсмөйөшө биләне. Унда банк вәкилдәренең ҡатнашыуы ҡайҙа аҡса булыуына ишара булһа, инновацион проекттарҙың ысынбарлыҡта тормошҡа ашырылыу мөмкинлеге уларға инвестиция һалыу ышанысын арттырҙы. Кадрҙарға килгәндә инде, йәшерен-батырының юҡ, бөгөнгө вуз системаһы инновацион мөхит талап иткән белгестәрҙе әҙерләмәй. Бының өсөн система үҙе үк модернизациялауҙы талап итә. Ҡалыпҡа һалынған вуз системаһы ниндәйҙер бер өлкә буйынса ғына белгестәр әҙерләһә, инновацион мөхит даими белем алыуҙы, даими камиллашыуҙы, үҙгәреүҙе, мобиллек талап итә. Шуның өсөн вуз системаһынан һуң белем алыуҙы һәм финанс грамоталығын арттырыуҙы, кадрҙарҙың квалификацияһын күтәреүҙе лә күҙ уңында тоторға кәрәк. Фәнгә килгәндә инде, Башҡортостанда төрлө яңылыҡтар уйлап табыусылар юҡ түгел. Бары тик уларҙы тормошҡа ашырыу, фекер алышыу, ярҙам ҡулы һуҙыу майҙансығы булырға тейеш.

Әйткәндәй, халыҡтан социологик һорау алыуҙар һөҙөмтәләре асыҡлауынса, 60 процент тәүге урынға унайлы һәм сифатлы тормош кимәлен ҡуя. Ихтыяж бар икән, тимәк, ул ҡәнәғәтләндерелергә һәм сифат менән үҙкиммәт тап килергә тейеш.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨ ҠАЛАҺЫ...

## ни өсөн матур?

**Ғәҙәттә, көн һайын күреп, эргәһенән үтеп йөрөгән нәмәләргә шул тиклем күҙ өйрәнә, хатта уларҙы тап шулай булырға тейеш тип ҡабул итәбеҙ һәм тағы ла яҡшыраҡты таптыра башлайбыҙ. Ә баш ҡала ҡунаҡтарына Өфөбөҙҙөң төҙөклөгө һәм уның йәшеллеге оҡшай. Улар ҡара яҙҙан ҡара көҙгә тиклем күҙ яуын алып ултырған сәскәләргә, йәшел ҡыуаҡтарға ҡарап иҫе китә.**



Ысынлап та, республикабыҙҙың баш ҡалаһында территорияны төҙөкләндереүгә һәм йәшелләндереүгә ҙур иғтибар бирелә. Был эшмәкәрлек бигерәк тә ҡала ығы-зығыһынан бер аҙ ял итеп алыу мөмкинлеген биргән йәшел зоналар булдырыуға йүнәлтелә. Был йәһәттән былтыр Өфөлә 49 мең үҫенте, ағас һәм ҡыуаҡ, шул иҫәптән 800 ҙур ағас ултыртылып, реконструкциянан һәм төҙөкләндерелгәндән һуң Софья аллеяһы, Михаил Нестеров, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге скверҙар асылһа, "Амакс-Турист" ҡунаҡхана комплексы һәм Спорт һарайы эргәһендәге территориялар яңы төҫ алды.

Быйыл да Өфө үҙенең ысын мәғәнәһендә йәшәреүен - йәшелләнеүен дауам итә. Революция өсөн көрәшеүселәр скверын төҙөкләндереү тамамланыу алдында. Бында тротуар плиткалары һалынып, йәшмә ҡулланылған бордюрҙар менән уратылған сәскә клумбалары төрлө төҫтәрҙә балҡыясаҡ. Тирә-яғына эскәмйәләр ултыртыласаҡ һәм диодлы яҡтылыҡ сығанаҡтары кисен дә унайлы ял итеү атмосфераһын тыуҙырасаҡ. Йүкә, сирень ағастары менән уратып алынған майҙан йәштәрҙе лә үҙенә ылыҡтырасаҡ, сөнки бында Уфанет компанияһы бушлай Wi-Fi зонаһын булдырасаҡ.

Тиҙҙән Пушкин һәм Мәжит Ғафури исемендәге скверҙар төҙөкләндерелә башлаясаҡ. Әйткәндәй, йәмәғәтселек фекерен иҫәпкә алып, Пушкин скверының исемен Рудольф Нуриев скверы атамаһынана алмаштырмаҡҡа булғандар.

Шулай уҡ Салауат Юлаев скверы ла үҙгәреш кисерәсәк. Өфөләрҙең һәм баш ҡала ҡунаҡтарының яратҡан урыны булған батыр һәйкәле эргәһендәге майҙанда тротуар плиткалары алмаштырыласаҡ, фонарҙар эленәсәк һәм эскәмйәләр ҡуйыласаҡ. Конгресс-холл эргәһендәге спорт майҙансығы ла реконструкция кисерәсәк. Зәки Вәлиди урамы менән Пушкин урамы араһында ла сквер барлыҡҡа киләсәк. Алдағы ике йылда иһә Зәки Вәлиди урамынан Ибраһимов бульварына тиклемгә территорияны төҙөкләндереү күҙаллана.

..."Өфө ҡалаһы ни өсөн матур?" тигән һорауға төрлө мәғәнәлә һәм төрлө контекста яуап биреп булыр ине. Әммә уның ысын матурлығы ошо матурлыҡты тыуҙыра һәм уның менән һоҡлана, ошо матурлыҡты һаҡлай белгән халҡындалыр, моғайын.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ӨЙ ҺАЛҒАНДАР ТАШТАН...

**Халыҡ фольклорында балаларҙы шундай алдаштырыу йәшәй: әгәр бала нимәлер ныҡышып йәки мыжып йонсота башлаһа, уға шул алдаштырыуҙы ҡабатлайҙар ҙа ҡабатлайҙар: "Өй һалғандар таштан, һөйләйемме баштан?"**

Быға тиклем баш ҡалала яңы төҙөп тапшырылған йорттар тап шул алдаштырыуҙы хәтерләтте: йорттарҙы төҙөп тапшыралар, әммә уның тирә-яғын сифатһыҙ итеп, күҙ буяу өсөн генә төҙөкләндереп китеү был мәсьәләгә ҡабат-ҡабат урап ҡайтырға, бер тапҡыр сифатлы итеп башҡарғанда, оҙаҡ йылдарға онотолоп торор проблеманы йыл һайын тигәндәй ҡабатларға мәжбүр итә ине. Ошо көндәрҙә үткәргән кәңәшмәлә ҡала мэры Ирек Ялалов артабан бындай яуапһыҙлыҡҡа юл ҡуйылмаясағын белдерҙе. Хәҙер яңы йорттар төҙөлөп файҙаланыуға тапшырылыр алдынан уның эргәһендәге территорияның төҙөклөгөнөң нормативтарға тура килеү-килмәүе тикшереләсәк. Йәғни юлдарҙы, майҙансыҡтарҙы асфальтлағанда һәм башҡа шундай төҙөләш эштәрен башҡарғанда материалдар махсус лабораторияла тикшереү үтергә тейеш. Ә инде яңы йорт тап шул лабораторияларҙың биргән актына ярашлы йә ҡабул ителәсәк, йә етешһеҙлектәрҙе бөтөргәнсе "һаҡаллы объект" булып ҡаласаҡ.

Әлеге ваҡытта ҡала бер нисә шундай объект табылған да инде. Һөҙөмтәлә төҙөләш ойошмаһына эштәрен еренә еткереп, сифатлы материал ҡулланып башҡарыу өсөн "баштан башларға" тура киләсәк. Был инде артыҡ сығымдар, тигән һүҙ. Тимәк, уйланырға урын бар.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан мосолмандары диниә назаратынан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанға Төркиәнең ислам дине әһелдәре килде. Улар беҙҙә рамаҙан айы аҙағына тиклем буласаҡ һәм Өфөнөң "Ихлас" мәсетендә һәм Борай ауылы мәсетендә тәрәүих намаҙҙары үткәрергә ярҙам итәсәк.

✓"Башҡортостан электр энергияһы компанияһы"нан хәбәр итеүҙәренсә, 11 июлдән 10 августа тиклем республиканың почта бүлексәләрендә электр энергияһы өсөн түләгән һәр ҡулланыусы "Почтала электр энергияһы өсөн түлә һәм бүләк от!" тигән акцияның ҡатнашыусыһы була ала. Бүләк отҡан кешеләргә телефон аша хәбәр итәсәктәр.

✓Республиканың 36 уҡытыусыһы РФ Белем биреү һәм фән министрлығының маҡтау грамоталары һәм РФ Президенты премияһына лайыҡ булды. Улар "Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проект сиктәрендә Бөтөн Рәсәй конкурсында еңеү яулаған. Аҡсалата премияға илдең иң яҡшы 1000 уҡытыусыһы лайыҡ тип табылған. Республикала федераль грантты 22 ауыл ерендә эшләүсе уҡытыусы һәм 14 ҡала уҡытыусыһы аласаҡ. 200 мең һум күләмендәге был грант Уҡытыусы көнө алдынан тапшырыласаҡ.

✓Эстонияла "Ағиҙел" Таллин башҡорт мәҙәни йәмғиәте һабантуй ойоштторҙо. Йәмғиәттең коллективы әҙерләгән концерт программаһы Палдискиҙа йәшәүселәрҙе башҡорт бейеүҙәре, йырҙары, милли музыка ҡоралдары һәм хатта башҡорт драматургияһы менән таныштырҙы. Милли уйындарҙан һуң Салауат Юлаев һәйкәле янында башҡорт геройы, уның атаһы һәм каторгала һәләк булған барлыҡ мосолмандар рухына аят уҡылды.

✓Өфөлә ҡайһы бер йәмәғәт транспорты туҡталыштарының атамалары үҙгәртеләсәк. Мәҫәлән, "Башҡортостан" ҡунаҡханаһы" туҡталышы хәҙер "М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры" туҡталышы тип аталасаҡ. Вологодская урамындағы "Ижад йорто" - "4-се балалар дауаханаһы", "10-сы икмәк заводы" трамвай туҡталышы - "Өфө икмәге" йәмғиәте тип үҙгәртеләсәк. Көньяҡ микрорайонындағы З. Биишева урамындағы яңы туҡталыш "158-се башҡорт гимназияһы" туҡталышы, ә З. Исмәғилев урамындағыһы "Көньяҡ" микрорайоны" атамаһын аласаҡ.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Мәктәптәрҙә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға ҡағылышлы төрлө фекерҙәр ишетәбеҙ. Кире фекерҙәрҙе ҡуйыртыусылар ҙа бар. Улар берәү-икәү генә булһа ла, бик әүҙемдәр, үҙ һүҙҙәрен интернет селтәрендә тарата, матбуғат баҫмаларында баҫтыра һәм күмәк тауыш иттереп күрһәтә белә. Ысынында, башҡа милләт вәкилдәренең күбеһе был мәсьәләгә тыныс ҡарай. Хатта үҙҙәре теләп, ныҡышып-ныҡышып, балаһын башҡорт мәктәптәренә килтереүсе ата-әсәләр ҙә етерлек. Баш ҡалалағы Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы быға раҫ. Унда башҡортса уҡыған бер-нисә уҡыусы менән аралашып, башҡа милләт вәкилдәре араһында телебеҙгә ҡарата ихтирам һаҡлаған, уны теләп өйрәнгән, киләсәктә был телдең кәрәк булырына инанған балалар барлығын күреп кинәндек.**

# БУЛАСАҠ ДИПЛОМАТҠА ЛА...




## башҡорт теле кәрәк булыуы бар

**3-сө синыф уҡыусылары Арина Ширяева һәм Милана Гегель башҡорт телен өйрәнеүҙәре тураһында кем уҙарҙан һөйләне:** Балалар баҡсаһына йөрөгән саҡта беҙгә уҡытыусы апай килеп, башҡорт телен өйрәтте. Башҡорт телен өйрәнеү кәрәк, сөнки уны белгәс, татар, үзбәк, ҡаҙаҡ телдәрен дә аңлай алабыҙ. Башҡорт теле бик үҙенсәлекле. Мәҫәлән, дәрестә бер бәләкәй генә һүҙгә ялғауҙар ҡушып, 15-тән дә күберәк хәрефтән торған һүҙ килтереп сығарабыҙ. Башҡорт теле - моңло тел. Шиғырҙар уҡығанда йырлағы килеп тора. Өйҙә әсәйебеҙ ҙә, атайыбыҙ ҙа башҡортса аңламағас, дәрес әҙерләүе ауырыраҡ. Шуға һүҙҙәрҙе ятлағанда төрлө иҫләткестәр ҡулланабыҙ. Мәҫәлән, "теләк" һүҙен "арбаның бер тәгәрмәсе дөрөҫ, икенсеһе әйләнгән" тип иҫтә ҡалдырҙыҡ.

**Виктория Васильева, 9-сы синыф уҡыусыһы:** Беҙ элек Башҡортостандан ситтә йәшәнек, шуға мин башҡорт телен бөтөнләй өйрәнә алманым. Быйыл Праганан Өфөгә күсеп ҡайтҡас ҡына башҡорт телен уҡый башланым. Телде белмәгән кешегә йәмғиәттә урын юҡ. Синыфташтарым араһында яңғыҙым башҡортса иркен һөйләшә алмауым аралашыуға ҡамасаулай. Киләсәктә мин дипломат һөнәренә эйә булырға теләйем, шуға күрә, башҡорт телен ентекләп өйрәнәсәкмен. Әлеге көндә мин инглиз телен яҡшы беләм, француз һәм немец телен бер йыл дауамында ентекле өйрәнәм.

**Всеволод Дмитриев, 1-се синыф уҡыусыһы:** Мин башҡорт телен быйыл мәктәпкә уҡырға килгәс кенә өйрәнә башланым. Өйҙә минең менән башҡортса һөйләшергә Зилә өләсәйем бар. Унан башҡа ғаиләлә береһе лә башҡортса белмәй, әсәйем - сыуаш, атайым урыҫ милләте вәкилдәре. Мин уларға һәр ваҡыт, өйҙә башҡорт телендә һөйләшәйек, тип әйтәм. Сөнки миңә шулай оҡшай. Синыфыбыҙҙа башҡорт балалары күп булһа ла, тик Рәсүл, Нәилә һәм Айым ғына туған телдәрендә һөйләшә. Мин улар менән иркенләп башҡорт телендә аралашам, шиғырҙар һөйләйем, мәктәптә башҡорт бейеү түңәрәгенә йөрөйөм. Бөтә синыф менән "Аҡбуҙат" журналына яҙылдыҡ, журналдың һәр һанын уҡып барам. БСТ каналында "Башҡорт телен өйрәнәм" тапшырыуын ҡарайым, уның ярҙамында күп ҡыҙыҡлы нәмәләр тураһында беләм, яңы һүҙҙәр ятлайым. Тағы ла минең ҡумыҙҙа уйнарға өйрәнгем килә. Беҙгә Миңлеғәфүр Зәйнетдинов тигән ҡумыҙсы килгәйне, уның ҡумыҙҙа уйнауы шул тиклем ныҡ оҡшаны. Мин дә уның кеүек оҫта уйнарға теләйем.

**Мирнагид Кязимов, 6-сы синыф уҡыусыһы:** Башҡорт телен бик яҡшы аңлайым, әммә һөйләшеүе ауырыраҡ. Дәрестәрҙә хикәйәне уҡып һөйләргә яратам. Әҙәбиәт дәресендә Салауат Юлаев тураһындағы әҫәрҙәрҙе үткән саҡта уның 14 йәшендә айыу менән алышыуы тураһында уҡып, аптыраным. Тағы ла Рәми Ғарипов, Шәйехзада Бабич шиғырҙарын, Зәйнәб Биишева, Мостай Кәрим әҫәрҙәрен яратып уҡыйым. Башҡорт теле миңә киләсәктә башҡорттар менән аралашыр өсөн кәрәк буласаҡ, тип уйлайым. Башҡортостанда йәшәгәс, башҡорт байрамдарына ла йөрөйбөҙ. Йыл һайын ғаилә менән Затон биҫтәһенә һабантуйға барабыҙ, мин тоҡтар менән һуғышыу, йомортҡаны ҡалаҡҡа һалып йүгереү кеүек ярыштарҙа ҡатнашырға яратам.

**Улукбек Жапаров, 6-сы синыф уҡыусыһы:** Башҡорт телен өйрәнеүе бик ауыр булманы. Сөнки ул минең туған телем - ҡырғыҙ теленә бик яҡын. Уҡыусыларҙың телде яҡшы белеүендә уҡытыусының роле ҙур булыуын мин 126-сы мәктәптән был гимназияға уҡырға күскәс аңланым. 126-сы мәктәптә уҡығанда башҡорт теле уҡытыусыһын бөтөнләй тыңламай, телде лә яҡшылап өйрәнмәй инек. Бында уҡытыусылар ҙа үҙ эштәрен яҡшы белә, беҙҙән дә ҡаты һорай. Атай-әсәйем башҡорт телен өйрәнеүемә һис ҡаршы түгел, сөнки күп телдәр белеү береһенә лә ҡамасауламай. Киреһенсә, дуҫтарымды арттыра, аңды үҫтерә.

**Сабина Элясова, 3-сө синыф уҡыусыһы:** Минең бер нисә сит телде өйрәнгем килә. Әле мәктәптә рус телен, инглиз телен, башҡорт телен өйрәнәм, өйҙә әсәйем төрөк теленән һабаҡтар бирә. Мин русса һәм башҡортса бәләкәй генә шиғырҙар ижад итәм. Әлегә шиғырҙарым әҙерәк ҡытыршы килеп сыға, тик мин киләсәктә күберәк яҙып, ҡәләмемде шымартасаҡмын. Уҡытыусыбыҙ йәйге каникул тураһында өйҙә инша яҙып, матур реферат эшләп килергә ҡушҡайны, уға өҫтәп, башҡортса шиғырымды ла төҫлө ҡәләмдәр менән яҙып килтерҙем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балаларҙың һәр береһе башҡорт телен өйрәнеүҙең киләсәктә мотлаҡ файҙаһы тейәсәк, тигән фекерҙә. Береһе сауҙа өлкәһендә, икенселәре табип, дипломат, кейем дизайнеры булырға хыялланған уҡыусылар, бөтә өлкәләрҙә лә башҡорттар менән бергә эшләргә тура киләсәк, улар менән туған телдәрендә аралашыу дуҫлыҡ ептәрен нығытыуға булышлыҡ ҡына итәсәк, тип һанай. Афарин был балаларға!**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## МЕҢ БЕЛГЕСКӘ - ЭШ УРЫНЫ

**Белгестәр республика предприятиеларына стажировкаға ебәреләсәк. Башҡортостан Хөкүмәтенең яңы ҡарары вуз тамамлаусыларҙы һәм эш биреүселәрҙе совет заманындағы онотолған ошондай механизм менән бәйләмәксе.**

Хөкүмәт ҡарарына ярашлы, йәш белгестәр аҙаҡ штатҡа алыныу мөмкинлеге менән эре компанияларға стажировкаға ебәреләсәк. Предприятиеларға дәртләндереү сараһы ҡарала: БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы һәр стажер өсөн 7 191 һум күләмендә субсидия түләргә әҙер. Шуның 5 500 һумы йәш белгескә эш хаҡы итеп түләнә, ҡалған өлөшө - страховка һәм һалым түләүҙәренә китәсәк. Намыҫлы эш биреүсе 5 500-ҙән күберәк түләйәсәк, әлбиттә, ә бюджеттан субсидия эш хаҡына өҫтәмә тип ҡарала. Стажировка ваҡыты - 6 ай. Был саралар йәштәрҙең үҙ теләктәренә бәйле атҡарыла. Вуз тамамлаусы, эшкә урынлашырға теләге булһа, Мәшғүллек үҙәгенә барып, теркәлә. Йәш һәм әүҙем белгестәрҙе эшкә ҡабул итергә теләгән эш биреүселәр шулай уҡ Мәшғүллек үҙәгенә ғариза яҙа һәм субсидия һорап мөрәжәғәт итә. Стажерҙар һаны сикләнмәгән күләмдә: берәү ҙә, унау ҙа булыуы ихтимал. 2013 йыл планына вуз тамамлаусы 978 кеше алынған. Дөрөҫөн әйткәндә, республика күләме өсөн был бик аҙ, әлбиттә, ләкин тәжрибә уңышлы барып сыҡһа, бюджеттан аҡса күберәк тә бүленәсәк. Был программала ҡатнашырға теләүселәр йәшәгән урындары буйынса Мәшғүллек үҙәгенә ғариза бирә.

## ЙӘШЕҢ ИҪӘПКӘ АЛЫНМАЙ

**Яңы федераль закон буйынса, хәҙер эшкә алыу тураһындағы иғландарҙа йәш һәм енес, кешенең расаһы, тән төҫө, милләте, туған теле, ғаилә хәле, йәшәгән урыны һәм дингә мөнәсәбәте буйынса сикләүҙәр күрһәтеү тыйыла. Ҡыҫҡаһы, былар кешенең эш сифаттары менән бәйле түгел, тип ҡарала.**

Был ҡағиҙәне боҙоусыларға штраф һалынасаҡ: физик шәхестәргә - 500-ҙән алып 1000 һумға тиклем һәм юридик шәхестәргә - 10 меңдән 15 меңгә тиклем. Социаль-хеҙмәт хоҡуҡтар үҙәге эксперттары мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙәге вакансиялар тураһындағы белдереүҙәрҙең 44 проценты (Мәскәүҙә - 60 проценты) дискриминацион иҫәпләнә. Эш биреүселәр буласаҡ хеҙмәткәрҙәрҙе йышыраҡ йәш һәм енес буйынса сикләүгә дусар итә. Rabota.ru порталы белгестәре иҫәпләүенсә, эш эҙләүселәрҙең 47 проценты бер тапҡыр булһа ла йәш буйынса сикләүҙәргә тарыһа, 26 проценты бындай хәл менән даими осрашып тора.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, эксперттар фекеренсә, яңы закон хеҙмәт баҙарында "көн торошо" яһай алмаҫтыр, ахыры. Вакансияларҙа енес, йәш һәм башҡа сикләүҙәр күрһәтелмәгән осраҡта ла, эш биреүсе үҙенә яраҡһыҙ хеҙмәткәрҙе барыбер эшкә алмаясаҡ. Сәбәптәрен аңлатып тормайынса ла. Икенсе яҡлап, вакансияға дәғүәселәрҙең эшкә урынлашыу мөмкинлеге барыбер артасаҡ, сөнки улар эш биреүсене үҙҙәренең булдыҡлылығына күҙмә-күҙ осрашып, инандыра ала.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һипкелдәр

❖ Әгәр ҙә һипкелдәрҙән ҡотолорға теләһәгеҙ, бер ус петрушка алып, ҡаты итеп төнәтегеҙ. Төнәтмәгә лимон һуты өҫтәп, уны иртәле-кисле һипкелдәргә һөртөгөҙ. Һипкелдәр ағарырға тейеш.

❖ Халыҡта ошондай рецепт та киң таралған. Лимон һутын яртылаш һыу йәиһә ҡыяр һуты менән ҡушып, көнөнә 2-3 тапҡыр тирегә һөртөргә.

❖ 2 ҡалаҡ кипкән бәпембә үләнен 15 минут буйы 300 мл һыуҙа ҡайнатырға, һөҙөргә, һыуытырға һәм иртәле-кисле битте һәм ҡулдарҙы йыуырға.

### Хроник панкреатит, холецистит (ташһыҙ)

Аш һеңдереү ағзалары функцияһын тергеҙеүсе үләндәр төнәтмәләре менән дуҫ булырға: әрем, манжетка, сөйәл үләне (чистотел), ҡатын-ҡыҙҙар өсөн - мәтрүшкә, ир-егеттәр өсөн кейәү үләне (чабрец), бәйғәмбәр тырнағы (календула), боланут (иван-чай), татлы тамыр (солодка). Үләндәрҙе тигеҙ өлөштә алырға, ваҡларға, быяла банкаға һалырға. Үләндәрҙең атамаһын һәм датаны банканың тышына мотлаҡ яҙырға. 1-2 ҡалаҡ үләнгә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 3 минут ҡайнап ултырған һыуҙа торорға. Йылы көйөнә көнөнә 3 тапҡыр эсергә. Дауаланыуҙы шулай уҡ 25 көн дауам итергә.

### Быу ҙа дауа

Ҡурылдай, туберкулез, ангина, һыуыҡ тейеү, киҙеү, фарингитты дауалау өсөн түбәндәге ингаляцияны ҡулланығыҙ. 60 грамм прополис менән 40 грамм балауыҙҙы эмалле һауытҡа һалып, һыулы кәстрүлгә ҡуйығыҙ. Һыуҙы ҡайнау хәленә килтерергә кәрәк. Быу күтәрелә башлау менән 10-15 минут ингаляция эшләргә. Дауаны иртән һәм кисен 10-15 көн дауам итергә.

### Хроник пиелонефрит

350 грамм ҡырҡбыуын төнәтмәһен яртылаш һыу менән болғатып, туҡыманы еүешләргә һәм ошо йылытҡыс компресты сәғәт ярым тоторға. 10 тапҡыр ҡабатлаһағыҙ, бик яҡшы һөҙөмтә бирәсәк.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ Бер аҙ арттырыбыраҡ булһа ла, маҡташтырып, хуплаштырып ебәрегеҙ. Уның туғандарын яманламаҫҡа тырышығыҙ. Бына шул саҡта, хөрмәтле ханымдар, ирҙәрегеҙ һеҙҙең янығыҙҙан хатта ҡыуһағыҙ ҙа китмәҫ.



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Ауыҙ эсе һәм тын юлы ауырыуҙарына бәйле им-том

**Айыу көпшәһе һуты тамыҙыу.** Ситтек - ауыҙҙа шекәрә кеүек тапма бөртеп сығыу. Уға тын ҡыҫылғанда, нәҙек көпшә аша тамсылап, айыу көпшәһе һутын тамыҙғандар. Тамыҙғанда: "Бында булдың! Йоҡоға талдың! Инде тал! Бирермен бер баш мал!" - тигәндәр.

**Тамаҡ ауырыуы (йотҡолоҡ) име**

1. Йотҡолок булһа: "Анауы тауҙы йотайым!" - тиһең дә, тауға ҡарап, төкөрөгөңдө йотаһың. "Бынауы тауҙы йотайым!" - тиһең дә йәнә йотаһың. Шулай өс тапҡыр ҡабатлайһың.

2. Йотҡолок булып, тамағы ауыртҡан балаға ҡарап, имсе: "Ни булған?" - ти. Әсәһе: "Йотҡолоҡ булған!" - ти. Шунан ауырыу: "Тауҙы, ташты йотам - хуп!" - тип өс тапҡыр төкөрөгөн йотоп, өс тапҡыр төкөрә.

3. Тамағым ауырта, тау йотам,
Тамағым ауырта, таш йотам!
Тфү, тфү, тфү! - тиһәң дә йотҡолоҡ бөтә икән.

**Тамаҡ рәнйеүе (зыяндаш) име.** Зыяндаш бик алама ауырыу. Ул икмәкте, башҡа аш-һыуҙы бисмиллаһыҙ ашауҙан килә. "Бисмилла" тимәгәс, тамаҡҡа ауырыу йәбешә, ҡағыла. Шунан кешенең тамағынан аш үтмәй. Тамаҡ бик ныҡ тарая икән. Хатта һыу ҙа үтмәй. Зыяндаш "Бисмилла"нан ҡурҡа, тиҙәр. Шуға ауырыуға ошо доғаны уҡырға ҡушалар:

Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,
Шифаһын бир.
Сәбәп ҡыл минең ауырыуыма.
Шифаһын бир.
Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,
Шифаһын бир.
Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,
Сәбәп ҡыл минең ауырыуыма.

**Ҡатма име.** Ҡатма ҡурҡыуҙан була, тиҙәр. Шуға ҡатма булһа, ауырыуҙан ҡурҡыуҙы алырға йә сығарырға кәрәк. Бының өсөн күкрәкте сүрәләр уҡып, ҡаҡҡыларға кәрәк.

**Кесе телдең төшөүе менән бәйле им-том.** Ҡатманан, ныҡ ҡурҡыуҙан кесе тел төшә икән. Кеше был осраҡта һөйләшә алмай, уның хатта тыны ҡыҫыла. Ауырыуҙы йүнәлтеү өсөн кесе телде ҡалаҡ менән күтәреү кәрәк. Күтәргәндә "Әлхәм" сүрәһен уҡыйҙар.

**Тын алмауҙан (ел ауырыуынан) им-том.** Ел ауырыуы тип һыуыҡ үтеүҙе әйтәләр. Ел тейһә, кеше тын ала алмай интегә. Был ауырыуға ҡаршы "Бисмилла" уҡып, төтәнәк эшләйҙәр, аҙаҡ бөтә ергә һыу һибәләр. Ҡалған-боҫҡан аштарҙы, ауырыуҙың берәй нәмәһен ергә күмгәндәр.

**Баҡа яңаҡтан (муйын туберкулезы) им-том**

1. Баҡа яңаҡ булһа, уны ҡыуыу юлы менән имләгәндәр. Бының өсөн уҡына-уҡына ике ташты алып, саҡматаш һуҡҡан кеүек бер-береһенә һуҡҡандар. Имләгәндә ошондай әпсен ҡулланылған:

*Ташты ташҡа ҡуяйым, таштан йүкә һуяйым.*
*Таштан һуйған йүкә менән был баҡаны быуайым.*
*Баҡа, баҡа, елгә кит! Тфү, тфү, тфү!*

2. Яңаҡ шешеп, баҡа булһа, уны һыйпау менән имләгәндәр. Шешкән яңаҡты һыйпай-һыйпай ошо әпсенде әйткәндәр:

*Баҡа булған. Баҡа имләйем.*
*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9,*
*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8,*
*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7,*
*1, 2, 3, 4, 5, 6,*
*1, 2, 3, 4, 5,*
*1, 2, 3, 4,*
*1, 2, 3,*
*1, 2,*
*1*
*Бер - бер нәмә лә ҡалмаһын,*
*Бөтһөн, китһен, тфү, тфү, тфү!*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

*ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА...*

**Йәшәйешебеҙҙән айырып алып булмай торған һәр төрлө проблемалары гәзитебеҙҙә әленән-әле күтәрелеп тора. Шуларҙың икәүһе хаҡында һүҙ алып бармаҡсымын. Тәүгеһе - ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың тышҡы ҡиәфәте, йәғни уларҙың кейеме хаҡында булһа, икенсе һүҙ - ниндәй сәбәптәр менән ирҙәрҙең йыш ҡына башҡа ҡатын-ҡыҙҙарға ҡыҙығып китеүе тураһында. Ни өсөн был ике мәсьәләне бер юлы күтәреүем ошо мәҡәләне уҡый-бара аңлашылыр, тигән өмөттәмен.**



# Ә БИТ ИРҘӘР СИСЕНМӘНЕ...

Гәзитебеҙҙең 24-се һанында Моразым Айсыуаҡовтың "Ялтырауыҡтар артында... ҡалтырауыҡтар ята" исемле мәҡәләһен, унан Ильяс Хыҙыровтың "Иманына күрә... баһаһы" исемле мәҡәләләрен уҡып сыҡҡас, үҙемдең дә әллә ҡасандан уйлап йөрөгән ошо юҫыҡтағы фекеремде уҡыусыларға еткермәк булдым.

Ислам диненең шәриғәт закондарында ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың нисек кейенеп йөрөргә тейешлегенә ишаралаған, йәғни тәненең ҡайһы өлөшөн башҡаларҙан йәшереп йөрөргә ҡушылған ҡәтғи талаптар бар. Мәҫәлән, ирҙәр бөтә кешеләрҙән дә (хатта башҡа ирҙәрҙән дә!) үҙҙәренең тубыҡтан юғары һәм кендектән түбән урындарын күрһәтеп йөрөргә тейеш түгел. Ә ҡатын-ҡыҙҙар аяҡтарының шайтан ашыҡтан түбәнерәк ерен, ҡул суҡтарын ғына башҡаларға күрһәтергә хаҡлы. Ә тәндәренең башҡа өлөшө - ғәүрәт, йәғни оят ер һанала.

Ни өсөн ҡатын-ҡыҙҙарҙы былай уҡ "ҡыҫа" ислам дине, тип уйлай күптәр. Әммә Бәйғәмбәребеҙ с.ғ.с. Аллаһы-Тәғәлә бойороғона таянып ҡушҡан был ҡәтғи талаптарҙың тамыры ифрат та тәрән. Тота килеп, һис бер нигеҙһеҙ бер ни ҙә ҡушылмаған, бер ни ҙә тыйылмаған ислам динендә. Барыбыҙ ҙа белеүенсә, ислам дине зинасылыҡты, йәғни үҙеңдең хәләл ефетеңдән башҡалар менән һәр төрлө, айырыуса енси бәйләнеште оло гонаһҡа һанай. Быны беребеҙ ҙә инҡар итә алмайбыҙ. Шул уҡ ваҡытта Аллаһы Тәғәлә ир-егеттәргә һиҙеү органдары (айырыуса, күҙ һәм ҡолаҡ) ярҙамында ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата тейешле инстинкт уяныу тәбиғәтен биргән. Шуға күрә лә ҡатын-ҡыҙҙың шәриғәт тарафынан тыйылған тән өлөштәрен (бот төптәре, янбаш ҡалҡыулыҡтары, түштәре, муйындары, беләктәре, тән һыҙаттары, ирендәре, күҙҙәре һ.б.) күреү, хатта тауышын ишетеү ҙә физик яҡтан һау-сәләмәт ир затының иғтибарын йәлеп итә лә инде. Ниндәй генә тәртипле ир-егет булмаһын, уның өсөн был күренеш, медицина термины менән әйткәндә - нормаль физиология.

Ошонан сығып, нимә әйтергә була, хөрмәтле мосолман ҡәрҙәштәрем, милләттәштәрем. Мосолман ҡатын-ҡыҙҙарының кейеме фәҡәт сит ирҙәрҙе йәлеп итмәүгә йүнәлдерелгән. Хәҙер күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: урамда бөтә ҡатындар хиджабта йөрөй, береһенең дә бер нәмәһе лә ирҙәрҙе әйҙәп тормай. Ә ирҙәр, әлбиттә, тик өйҙә, үҙенең хәләл ефетендә генә күрә гүзәл һыҙаттарҙы...

Ислам дине хөкөм һөргән ғәрәп илдәрендә зинасылыҡ юҡ кимәлендә. Беренсенән, бында ҡатын-ҡыҙҙың юғарыла әйтеп үтелгән кейеме роль уйнаһа, икенсенән, зина өсөн ҡаты язаға тарттырылыу ҡурҡынысы бар. Ә иң ҡурҡынысы - әхирәттә бындай гонаһ өсөн Аллаһ алдында яуап биреү.

Октябрь революцияһынан һуң, динһеҙлек осоро башланғас, башҡа илдәрҙең ҡатын-ҡыҙҙарына эйәреп, беҙҙекеләр ҙә сисенеп ташланы. Баштан-аяҡ, тип әйтерлек. Хәҙерге көнгәсә гүзәлдәребеҙҙең ошо ярым шәрә хәлен йәшәү нормаһы тигән ифрат та хаталы уйҙабыҙ. Һирәкләштереп, унда-бында хиджаб кейгән ҡыҙ-ҡатындарға хатта ҡырын ҡараусылар ҙа бар. Ә шәриғәтте, хөрмәтле һеңлекәштәр, ҡасандыр кеше уйлап сығарған иҫке закондар ҡалдығы тип уйларға ярамай. Сөнки ул - Бәйғәмбәребеҙҙең Раббыбыҙ бойороғона таянып ҡушылған әмере. Был әмер бер ҡасан да иҫкермәй һәм дә бәхәс уята торған нәмә түгел, ә фәҡәт үтәлергә тейешле ғәмәл...

Хөрмәтле ханымдар, бына шулай, үҙегеҙ ошо шәриғәт талаптарын инҡар итәһегеҙ икән, тимәк, һеҙ үҙегеҙҙең боттарығыҙҙың, түштәрегеҙҙең матурлығын, ирендәрегеҙҙең, тәнегеҙҙең гүзәл һыҙаттарын кемгәлер башҡа кешеләргә күрһәтергә ашҡынаһығыҙ. Бала саҡтан шулай кейенеп ғәҙәтләнгәс, хатта был турала уйланып та ҡарағанығыҙ юҡтыр күптәрегеҙҙең. Бөгөнгө көндөң ысынбарлығы тап бына ошонда, ҡәҙерлеләрҙән-ҡәҙерле гүзәл заттар. Нисек кенә үкенесле булмаһын... Икенсе төрлө итеп әйткәндә, һеҙ, һылыуҡайҙар, ирҙәрегеҙҙе үҙегеҙ үк ана шундай аҙғынлыҡҡа этәрәһегеҙ, үҙегеҙ ҙә һиҙмәҫтән. Һуңынан үҙегеҙ үк ғәжәпләнәһегеҙ: нишләп минең ирем башҡаларға иғтибар итә икән, минең уларҙан ҡайһы ерем кәм, йәнәһе.

Ә бит, ҡәҙерлеләрем, ирҙәр сисенмәне! Эйе, ысынлап та, сисенмәне. Хатта ниндәй генә эҫе көндәр булғанда ла, уларҙың билгә ҡәҙәр сисенеп ташлаған ваҡыттары ла бик һирәк. Ни өсөн, тип һорарһығыҙ. Яуап бирәм: сөнки уларҙың башҡаларға күрһәтер гүзәллектәре юҡ. Шуға күрә улар, һеҙҙән айырмалы, ҡаршы енес вәкилдәренең иғтибарын йәлеп итерлек ерҙәрен күрһәтергә ашҡынып бармай...

Юғарыла әйтелгәндәр, әлбиттә, диндән алыҫ булған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың аңына ҡапыл да барып етерлек түгелдер. Шул ысынбарлыҡты күҙ уңында тотоп, бөгөнгө күҙлектән сығып, гүзәл заттарға ысынбарлыҡҡа яҡыныраҡ кәңәштәр ҙә бирмәк булдым. Үҙегеҙҙең хәләл ефеттәрегеҙгә мөнәсәбәттәр буйынса.

Беренсенән, ирҙәрегеҙгә ни тиклем яғымлы булһағыҙ, шул тиклем уны үҙ янығыҙҙан ебәрмәй тота аласаҡһығыҙ. Был - тормоштоң һис кем инҡар итә алмаҫлыҡ законы. Әгәр ҙә ирегеҙҙе үҙегеҙҙең шәхси милек һымаҡ итеп күреп, уға ни етте - шундай һүҙҙәр әйтеп, юҡҡа-барға уны "игәп" торор булһағыҙ, уның бына ошондай "кире" яҡтары булмаған башҡа ҡатындарҙы эҙләй башлауы бик ихтимал.

Икенсенән, ирҙәрегеҙгә йылмайыуығыҙҙы йәлләмәгеҙ. Мөмкин тиклем уларға йышыраҡ йылмайырға тырышығыҙ. Кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә... Ирегеҙгә ана шунан да матур бүләк булмаҫ.

Өсөнсөнән, бер аҙ арттырыбыраҡ булһа ла, маҡташтырып, хуплаштырып ебәрегеҙ. Уның туғандарын яманламаҫҡа тырышығыҙ. Ата-әсәһенең яҡшы яҡтарын йышыраҡ телгә алығыҙ. Бына шул саҡта, хөрмәтле ханымдар, ирҙәрегеҙ һеҙҙең янығыҙҙан хатта ҡыуһағыҙ ҙа китмәҫ.

Дүртенсенән, бер аҙ ғына өйгә һуңлаңҡырап ҡайтҡан ирегеҙгә, туҙынмағыҙ, уларҙан һорау алмағыҙ. Бер аҙ ял итеп алғас, ни өсөн һуңлап ҡайтҡанын үҙе үк һөйләп бирәсәк. Һеҙ магазиндар буйлап оҙаҡ йөрөгән һымаҡ, ир кешенең дә (гараж йә иһә машина тирәһендә, һ.б.) һәр төрлө эше булыуы мөмкин.

Бишенсенән, үҙегеҙҙең тәнегеҙҙән кәмселектәр эҙләмәгеҙ. Бындай үҙеңдең камил булмау тойғоһо тағы ла һеҙҙе урынһыҙ көнләшеүҙәргә килтереүе мөмкин. Күңелегеҙгә "Фәлән бисәнең бото тегеләй, төгәнденң түше былай. Минең ирем, әлбиттә, шундайҙарға күҙ һалалыр инде..." тигән һымағыраҡ ифрат та хаталы уйҙар инеп оялауы мөмкин.

Алтынсынан, ирегеҙ тик һеҙҙе генә яҡын күрә, тигән уйҙа булығыҙ һәр саҡ. Сөнки, ысынлап та, үҙенең ғүмер юлдашы итеп башҡаны түгел, ә тик һеҙҙе генә һайлаған бит улар. Һәм һеҙ ҙә уларҙы һайлағанһығыҙ. Һеҙҙән дә ҡәҙерле кешеһе юҡ уларҙың. Өйгә ҡайтып инеү менән киноларҙа күрһәтелгән яһалма үбеп алыуҙарҙы ысын тип ҡабул итмәгеҙ һәм быны ирҙәрегеҙҙән талап итергә тырышмағыҙ. Улар һеҙҙе шундай тамашаһыҙ ҙа ярата, ышанығыҙ. Улар тағы һеҙҙең һөйөклө балаларығыҙҙың атаһы, өй һаҡсыһы, өй терәге, һеҙҙең серҙәшегеҙ, ярҙамсығыҙ һ.б. Ошо исемлеккә фәҡәт бот күтәреп, өйҙә ҡыл да ҡыбырлатмай ятҡан, йә иһә эскелектән башы сыҡмаған ирҙәр генә инмәй ҡалыуы мөмкин. Ундайҙар, үкенескә ҡаршы, бар. Ул - айырым, ҙур мәсьәлә.

Тағы ла бер кәңәшемде сер генә итеп әйтәм: хәләл ефетегеҙҙең намаҙға баҫырға уйы бар икән - ҡушҡуллап риза булыу ғына түгел, ә тик тәбриклләгеҙ генә, хатта үҙегеҙ ҙә уға эйәрергә тырышығыҙ. Сөнки ислам диненә күңеле менән бирелгән ирҙәр зина ҡылыу һымаҡ алама ғәҙәттәрҙең ниндәй ҡурҡыныс һәм ауыр гонаһ икәнен белә...

Ошо әйткәндәр менән риза булмаусылар ҙа барҙыр. Ундайҙарҙың фекерен дә тыңларға әҙермен.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ ***Был гипотеза башҡорт эпосын тикшереү өсөн яңы офоҡтар аса. Әгәр ул раҫлана икән, "Урал батыр" эпосының бик борон яҙылғанын дәлилләйәсәк, уның хәҙерге яҙма тексын Гомер ижадының замандашы итәсәк.***

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ ҺӘМ...

## Боронғо Греция мифтары араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар?



Аримасптарҙың грифондар менән көрәше сюжетының антик мәҙәниәткә тәрән үтеп инеүе түбәндәге миҫалдар менән ҡылыҡһырлана. Был сюжет Боронғо Грецияның һынлы сәнғәтенә Аристей заманында уҡ ингән. Ул беҙҙең эраға тиклем VII-VI быуаттарҙа эшләнгән Келермесс көҙгөһөнөң артында һүрәтләнгән. 2-се һәм 3-сө һүрәттә (28-се һан) күрһәтелгән әйберҙәр беҙҙең эраға тиклем IV быуатҡа ҡарай. Урта быуаттарҙа был сюжет XIII быуатта Херефордск картаһында сағылыш таба (5-се һүрәт).

Был һүрәттәрҙең айырылып торған үҙенсәлектәрен дә әйтеп китеү кәрәк. Сюжеттың өс төрлө һүрәтләнеше бар: ике грифон һәм бер аримасп (2-се һүрәт); бер грифон һәм бер аримасп (3-се һүрәт); ике аримасп һәм бер грифон (4-5-се һүрәттәр). Һуңғы һүрәттә ҡоралды ир менән ҡатын грифондарға ҡаршы һүрәтләнгән. Европа әҙәбиәтендә был сюжет беҙҙең дәүергә тиклем һаҡланған. Бына Иоганн Гетеның Борис Пастернак тәржемәһендәге "Фауст" әҫәренән өҙөк:

*ГРИФЫ:*
*Мы им покажем,*
*жуликам пропащим!*
*АРИМАСПЫ:*
*Но не сегодня.*
*Нынче торжество.*
*А за ночь остальное [золото]*
*мы растащим.*
*И в этот раз добьемся своего.*

Ниммәһе ҡыҙыҡ, башҡорт эпосы буйынса Урал батырҙың төп ҡаһарманлығы булып дейеүҙәр - ошо боронғо грек һүрәттәрендә сағылыш тапҡан осоп йөрөүсе мифик йыртҡыстар менән алышы тора. Быны боронғо грек авторҙары араһында берҙән-бер Аристейҙың ғына ҡортсолоҡ тураһында белеме булыуы менән аңлатырға мөмкин, ә "Урал батыр" эпосында ҡорт инәһе, күс, уларҙың сәскәләрҙән һут йыйыуы тураһында мәғлүмәттәр бар. Эпостың проза версияһында "туҡмаҡ" - ағас ботағына элеп ҡуйылған таш ярҙамында солоҡто айыуҙан һаҡлауҙың иң боронғо ысулы һүрәтләнә. Шулай итеп, Аристейҙың "Аримаспар тураһында эпос"ының "Урал батыр" башҡорт эпосының грек теленә тәржемәһе итеп таныу өсөн тап килеүҙәр байтаҡ.

Был гипотеза башҡорт эпосын тикшереү өсөн яңы офоҡтар аса. Әгәр ул раҫлана икән, "Урал батыр" эпосының бик борон яҙылғанын дәлилләйәсәк, уның хәҙерге яҙма тексын Гомер ижадының замандашы итәсәк.

Текстың тергеҙелеүенә өмөтләнергә ярамай. Ваҡыт арауығы бик алыҫ, хатта Геродот та "Аримаспей"ҙың тексын табырға тырышып ҡараған. Әммә "Урал батыр" башҡорт эпосы менән билдәләнгән эҙләү йүнәлешен аныҡлаштырыу бында күрһәтелгән һүрәттәр рәүешендә беренсе һөҙөмтәләрен бирҙе лә инде.

Тикшеренеүҙәрҙең яңы өйрәнеү өлкәһе булып Боронғо Грецияның рәсем сәнғәте, әҙәбиәте һәм археологияһы торорға тейеш. Бында ла билдәле һөҙөмтәләр бар. Абаш мәҙәниәте буйынса беҙҙең ғалимдарҙың археологик материалдарында "псалии, аналогичные подобным из шахтных гробниц Микен", "ножы киммерийского типа" тураһында иҫкә алынып кителә. Микен - Эгей цивилизацияһы ҡалаһы, Гомерға ул "алтынға бай Микен" булараҡ билдәле. Боронғо грек ювелир әйберҙәренең күпселеге Урал алтынынан эшләнгәне асыҡланған. Киммерҙар ҙа Эгей донъяһы халҡы. Көньяҡ Урал төбәгенең Абаш ҡәберлектәренән табылған баш һөйәктәре заманында билдәле антрополог М.М.Герасимовтың ҡулына эләгә. Ул күпселек баш һөйәктәренең Урта диңгеҙ тибындағы күсеп килгән европалыларға ҡарағанын асыҡлай.

Үкенескә күрә, был өҙөк-йыртыҡ дәлилдәр һәм уларға тейешле иғтибар бүленмәй. Башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларының барлыҡ мәҙәниәте нисектер икенсел, ситтән килгән тип ҡарала. "Урал батыр" эпосы ла был яҙмышты урап үтмәгән. Әммә кешелек цивилизацияһы тарихының үҫеше бөтөнләй икенсе күренеште һүрәтләй. Таш быуат үткәс, бронза дәүере башында Урал кеүек асыҡ еҙ ятҡылыҡтары булған территориялар үҙ үҫештәрендә ҙур аҙымдар менән алға китә. Урал төбәге атты транспорт һәм хәрби сара итеп ҡулланыу буйынса алдынғылыҡҡа сыға. Аттар бында ҡырағай тәбиғәттә күпләп йөрөй, ә уларҙы ҡулға эйәләштереү ул заман өсөн мотор уйлап сығарып, уны етештерә башлауға тиң була. Бында төбәктең алтынға бай булыуын да өҫтәргә кәрәк.

Урал аръяғында донъяуи әһәмиәткә эйә булған мәҙәниәт һәм дини үҙәк тә шундай уҡ үҫеш ала. Урал халҡының динилеге Урта диңгеҙ буйында билдәле була һәм боронғо грек авторҙары тарафынан билдәләнә. Шуға күрә, Урандың (Урал) боронғо Грецияның пантеонында булыуы һәм уның батырлыҡтарының боронғо Элладаның мифтарына һәм легендаларына инеүе тәбиғи һәм аңлайышлы.

**Радик ВАХИТОВ.**
**(Аҙағы. Башы 25-28-се һандарҙа).**



һүрәт 5.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Бесәнгә башҡорттар июнь башында төшкән һәм бар ғаилә, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла индереп, салғы менән сапҡан. Сабылған һәм киптерелгән бесәнде тәүҙә күбәләргә, һуңынан кәбәнгә өйгәндәр (һүрәт). Ауылға уларҙы сана юлы буйлап көҙгөһөн йәки ҡышын алып ҡайтҡандар. Бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш һәм таулы райондарҙа йәшәгән башҡорттарға, малдары ул тиклем күп булмаһа ла, бесәнде күп итеп әҙерләргә тура килгән. Көньяҡ Урал тауҙарында, бигерәк тә уның көнбайыш битләүҙәрендә ҡар иртә ята һәм бигерәк тә тәрән була. Унда тибенгә сығыу мөмкин түгел һәм ҡыш оҙайлы булғанда башҡорттарға бесән етмәй ҡала. Был осраҡта улар малдарға яҙғыһын ҡарама, йыла, йүкә һәм башҡа япраҡлы ағастарҙың йәш ботағын ашатҡан.



Башҡорттарҙа малды тәрбиәләү тигән төшөнсә булмай. Аттар яланда һәм урманда, һыйырҙар һәм һарыҡтар кеүек үк, өйөрө менән йөрөй. Табундар бер нисә өйөрҙән һәм ҡолонло бейәләрҙән тора. Уларҙы өйөр айғыры көтә һәм һаҡлай. Ул үҙ өйөрөндәге бейәләр артынан иғтибарлап күҙәтә, уларҙы өйөрҙән ситкә сығармай һәм сит айғырҙарҙы яҡын килтермәй. Эре мөгөҙлө мал һәм һарыҡтар көтөү менән йөрөгән.

Һауым бейәләрен тотоу өсөн ҡороҡ файҙаланғандар. Нәҙек, 3-4 метр оҙонлоғондағы ҡаҙыҡтың уртаһына һәм алғы осона ялдан үрелгән тоҡон бәйләнә. Тоҡон аттың муйынына кейҙерелә лә инде.

Һәр иртән башҡорттар һыбай килеш малдары артынан барып, уларҙы йәйләү урынына ҡыуып килтергән. Ҡолондар әсәһен иммәһен өсөн уларға шалтыраҡлы нуҡта кейҙерәләр (һүрәт) һәм ер өҫтөнән һуҙылған елеләргә бәйләп ҡуялар (һүрәт). Быҙауҙарға шул уҡ маҡсат-





тан морондарына махсус туҙ моронсалар - борғаҡтар кейҙергәндәр (һүрәттәр). Ҡолонло бейәләрҙе һәм быҙаулы һыйырҙарҙы көтөүгә киске яҡҡа ғына сығарғандар.





Себен-серәкәйҙәр малдарҙы ныҡ ыҙалатҡан урманлы урындарҙы башҡорттар малдарҙы бөжәктәрҙән һаҡлау өсөн төтөн менән ыҫлатҡандар. Ә ҡояштан һаҡланыу өсөн махсус тупалыҡтар ҡуйғандар.

Миңә билдәле булыуынса, көтөү эттәрен башҡорттар яланда ла, урманда ла тотмаған. Башҡорттар хатта малдарына билдә лә һалмаған. Аттарға ғына тамға һалғандар (һүрәт). Ҡыҙҙырылған тимер тамға бер йәшлек һәм ике йәшлек аттарға баҫылған. Ат бесеүсе үҙенең эшен башҡарыу өсөн үткер бәке һәм ҡыҫа файҙаланған. Айғырҙарҙы өс-дүрт йәштәрендә бескәндәр. Ике-өс көндән ҡыҫаны алғандар. Бер йәшлек үгеҙҙәрҙе бескәндән һуң, яраһына тоҙ һипкәндәр.



**Гәзитебеҙҙең 20-се һанында күренекле шағирә, йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл СИТДИҠОВА менән әңгәмәнең тәүге өлөшө баҫылғандан һуң хат һәм телефон аша күптәр үҙ фекерен белдерҙе. Яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева мәсәлән, "әйберләтә яҙма" төшөнсәһе урынына "әйберләтә кинәйә, мәғлүмәт еткереү" тигән төшөнсәне тәҡдим итә. Ә бына шағир, филология фәндәре докторы Фәнил Күзбәков үҙенең "Башҡорттарҙың этник мәҙәниәт күренеше булараҡ башҡорт журналистикаһы" тигән китабында әйберләтә яҙманы журналистикаға тиклемге яҙма тип ҡарай. Шуныһы һөйөнөслө: был күренеш нисек кенә аталмаһын, ул барыһын да ҡыҙыҡһындырҙы, айырым һөйләшеү темаһы булараҡ күтәрелеп сығыуы менән иғтибарҙы йәлеп итте. Тап шуның өсөн дә алдағы һандарҙың "Шаңдау" рубрикаһында был хаҡта һөйләшеүҙәрҙе дауам итербеҙ, тибеҙ. Әңгәмәнең икенсе өлөшөндә һүҙ башҡорт халыҡ йырҙары һәм шиғриәт хаҡында бара.**

**Г. Ситдиҡова:** Мәрйәм апайҙың фекере менән килешәм - әйберләтә яҙма, тигәне фәндә шулай нарыҡлана. Ә гәмәлдә был, әлбиттә, әйберләтә хат, әйберләтә хәбәр, әйберләтә сәләм, мәғлүмәт тә булып тора. Миненсә, халҡыбыҙҙа әйрәтелгән ҡоштар аша ла хәбәр ебәреү булғандыр ул. Ә ҡош тәпәйенә ауыр нәмә тағып булмай, тимәк, еңел генә, күпте кинәйәләүсе нәмәләр булыуы зарур. Ҡош теле - ҡыҫҡа хәбәр тип аңлаһылыуы ошоға ла бәйлелер.

Интернеттағы әңгәмәбеҙ айҡанлы бик ҡыҙыҡ яҙмалар

Беренсе мөхәббәтем класташым ине. Ул егет тә мине оҡшатҡан булһа кәрәк, ун беренсене бөткән ваҡытта әхирәтем аша үҙенең кесә тарағын миңә ебәрҙе. Тараҡты алып ҡарағайным, эй-й-й, тештәренең араһы тулы бысраҡ. Әхирәтемә кире илтеп бирҙем. Яратманым да ҡуйҙым. Мөхәббәт тигән нәмә ҡайҙалыр осто ла китте..."

С.И. яҙа: "Беҙ йәш саҡтарҙа шулай тыйнаҡ инек шул! Мине лә бер егет хат, бүләк ебәреп аптырата ине. Үҙен бер ҙә оҡшатмайым. Әйткәнде ҡолағына элмәй, һаман хат яҙа.

- бала-саға менән сана шыуырға сыға ла китә икән, бай энер төшкәс быны эҙләп алып ҡайта икән... Зәйнәп ауылын, туғандарын шул тиклем һағынған, кемдер аша әйберләтә хат ебәрә алған. Хатында ҡош ҡаурыйы, һары сәскә, көл менән күмер һалынған. Ҡош ҡаурыйы - ҡанаттарым булһа осоп ҡына ҡайтыр инем, һары сәскә - һағындым-һарғайҙым, күмер менән көл - һеҙҙе күрергә өмөттәрем һүнде инде, тигәнде аңлатҡан, тип һөйләгәйне Фазила әбейем. Ысынлап та, бер Йәғәфәр исемле генә малай тыуҙырғандан һуң,

Ә башҡорт халыҡ йырында бер генә артыҡ йәки осраҡлы һүҙ ҙә, образ да юҡ! Ул саҡта бит шиғриәт китап аша түгел, телдән-телгә тапшырылып таралған, халыҡтың һүҙ нескәлеген тойомлауы иҫ киткес көслө булған. Әле килеп, ул йырҙар шиғыр итеп тапшырылһа, мөхәррирҙәр, алғы ике юлы мәғәнәһеҙ, тип, кире борорҙар ине.Йырҙың һүҙҙәрен иҫкә төшөрәйек:

*Иртә лә томан,*
*кис тә томан,*
*Был томанҡайҙарға*
*ни булған?*
*Тауға ла менеп,*
*ташҡа баҫып,*
*Һин ҡарарһың, йәнем,*
*мин булмам.*

Тәүге ике юлда һүҙ һауа торошо тураһында кеүек. Гәмәлдә, ул артабанғы юлдарға пролог, алһүҙ булып килә, йырҙың эстәлегенә туранан-тура бәйле. Һис асылмаҫ томан - яҙмыш билдәһеҙлеге, хафа борсой тиҙҙән яҡындарынан, һөйгәненән айырылыр кешене. Кешене томан булып уй баҫҡан. Ул шул томандар эсемаңы бүләк итеү - насар гәмәл һанала ине. Хәҙер сәхнәне һары тәҫ, һары күлдәк баҫты.

**Ә.Ғ.-Үтәбай**: Халҡыбыҙ йырҙары текстарын кинәйәнең, образлылыҡтың иң күркәм, иң камил өлгәләре тип тә атарға булалыр. Һеҙ миҫал итеп килтергән "Томан" йырында, мәсәлән, "әйберләтә яҙма" предметы итеп томанды алһаҡ, уның "ҡош теле"нә, йәғни образға, кинәйәгә әүерелгән мәғәнәһе - ғүмерлеккә һөйгәнен юғалтҡан кешенең һағыш-хәсрәте. Томан бында билдәһеҙлектең, асыҡ булмауҙың, аҙашыуға, юғалыуға сәбәп булған хәлдең кинәйәһе итеп кенә алынған, ә мәғәнәһе унан да тәрәнерәк, йәғни томандан да ҡуйыраҡ. Дөрөҫ әйтәһегеҙ, былдай кинәйәләрҙе йәштәр түгел, хатта ололар ҙа аңлап бөтә алмай. Ә кем белә, бәлки, ана шулай йырҙарыбыҙҙың мәғәнәһе таралмаҫ томан кеүек мәңге асылып бөтмәүендә лә яталыр уларҙың көсө. Асылған сер сер булыуҙан туҡтай, бер аҙҙан уның ҡыҙығы ла ҡалмай бит. Бер тапҡыр барлыҡҡа килде, мәҫәлән, беҙҙең инсафлы халыҡта егеттәр ҡуҙе төшкән ҡыҙға үҙенең берәй шәхси әйберен ебәреп, хисен һиҙҙереүе беҙҙең көндәргә тиклем килеп етә яҙған, имеш. Ҡыҙ уны оҡшатмаһа, әйберен кире ҡайтарған да ҡуйған. Ифрат әҙәпле лә, матур ҙа йола булғансы.

# ӘЙБЕРЛӘТӘ ЯҘМА,

## Халҡыбыҙҙың

Бына Кәримә Хәсәнованың яҙғаны: "Гүзәл Ситдиҡова менән Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың әйберләтә яҙма, ҡош теле хаҡындағы әңгәмәһе йәш сағымды иҫкә төшөрҙө. Ысынлап та, әйберләтә хатлашыу беҙҙең йәш саҡта ла булды. Берәй егет киске уйынға ҡыҙҙы саҡырырға теләһә, ниәтен тел менән әйтмәй ине. Ул был саҡта әхирәте аша күршеһендәге танышы аша берәй әйбер ебәрә ине. Алып килгән кеше аманатты тапшырған саҡта уның кем тарафынан ебәрелеүен әйтә. Ә ҡыҙ кешегә егет алдан оҡшаған булһа, әйберҙе алып ҡала һәм кисен үҙенә кире бирә, алмаһа, тимәк, был егетте ҡыҙ оҡшатмай һәм уның менән киске уйында осрашмай. Был, бер яҡтан, үҙ-ара аңлашылмаусылыҡтан ҡотҡара, ни тиһәң дә, бер ниндәй хилафлыҡ та юҡ, сөнки егет ҡыҙ менән әле осрашмаған. Сөнки беҙ йәш саҡта, ни өсөндөр, шундай ҡанун ине: ҡыҙ киске уйынға сыҡҡан көндән ниндәй егет менән йөрөй башлай, ул был егеттеке тип һанала ине. Икенсенән, егет оҡшаһа, ҡыҙ үҙе туранан-тура, һин оҡшайһың, тип әйтә алмай бит инде. Ә былай, әйберен алған, ул егеттең оҡшағанын ике кеше генә белә.

Бик йән көйә башлағас, яҙған хатындағы хаталарын ҡыҙыл ҡәләм менән төҙәтеп, "2"-ле ҡуйып, кире ебәрҙем. Хат ебәреү тамам булды шунан һуң..."

З.М. яҙа: "Ә миңә бер егет уның менән осрашмаған өсөн



конверт эсенә 1 тин аҡса һалып ебәрҙе, йәнәһе, кәрәгең бер тин".

Ринат Шәйбәков: "Бер ғибрәтле хәлде яҙам. Өләсәйем Фәғиләнең атаһы Мөхәмәтдин (Аҙау ауылы) туғыҙ йәшлек ҡыҙы Зәйнәпте Береш ауылына Moраҙым байға кейәүгә бирә (ҡатай байы ҡумырыҡтың абруйлы нәҫеле менән туғанлашҡыһы килгәндер инде, бик ныҡышҡан, олатай риза булған, байлығына ла ҡыҙғандыр инде). Зәйнәп сабый ғына

һарыға һабышып үлгән Зәйнәп..."

Моғайын, күптәр ошондай иҫтәлектәр һаҡлайҙыр әлегәсә. Йырҙарыбыҙға ла ингән ул ҡош теле. Бер мәл сәйәхәттә йөрөгәндә Мәскәү ғалимәһенең ҡаҙаҡ йырҙары тураһындағы фекере менән килешмәй, бәхәсләшеп алырға тура килде. "Уларҙың милли йырҙары - нимә күрәм, шуны йырлайым..." - тине был. Ҡаҙаҡ йырҙарында кинәйә бик көслө, беҙҙең башҡорт халыҡ йырҙарындағы кеүек үк, бер генә артыҡ, кәрәкмәгән һүҙ юҡ, тип байтаҡ миҫалдар килтерҙем.

Беҙҙең халыҡ йырҙары тураһында ла, тәүге ике юлы рифма, ритм өсөн генә уйлап сығарылған, тигәндәрен ишеткәнем бар. Быны сит-яттар ҙа түгел, үҙебеҙҙекеләр әйтеүе йәндә әрнетә. Әйтеп кенә ҡалмайҙар, шунан сығып, тәржемә лә итәләр. Кинәйә, ситләтеп әйтеү телен юғалтып бөткәнбеҙ тиерлек, сөнки. Гәмәлдә тәүге ике юл менән һуңғылары араһында параллель ята. Әйтәйек, "Томан" йырындағы юлдарҙы йәш быуын түгел, ололар ҙа төшөнөп бөтмәй, сөнки сәүит йыры, шиғриәте менән тәрбиәләнгәндәр.

нә инеп юғалыр, тауға менеп, ташҡа баҫып ҡына ла күрә алмаҫ уны йәре - юлдар бик алыҫтарға алып китәсәк. Йырҙың һөйгән ҡыҙға арналғанлығы артабанғы строфаларҙа кәкүк һәм былбыл ҡоштар образдары индерелеүҙән дә аңлашыла.

Йәнә бер йыр:

*Урал буйҡайҙары, әй,*
*ҡалды инде,*
*Һары баш, һары баш*
*үләндәр алды инде.*
*Урал буйҡайында уҙған ғүмер*
*Һағынып - һағынып*
*һөйләргә ҡалды инде.*

"Ҡалды" - беҙҙең районда ҡоҙам Ғаззали Нурғәлиндан яҙып алынған йыр. Һүҙҙәренә иғтибар итәйек: һарыбаш үлән - һағыш төҫө. Гөмүмән, беҙҙең халыҡта һары - ҡайғы, мәтам, айырылыу, бәхилләшеү төҫө. "Һарғайып үлгән" тигән идиоманы беҙ халыҡтың ауыҙ-тел ижадында йыш осратабыҙ. Һарыбаш үлән алды - Урал тураһында һары һағыш ҡалды, был урындар - мәтам урыны, юғалған, ҡулдан киткән урын!

Һағышҡа тарта, тип, элек һары төҫлө күлдәкте киймәнеләр, һары төҫ ингән туҡыыр ғына башҡарылып, шундуҡ онотолоуға дусар "өҫ тинлек" заман йырҙарының үтә лә күп булыуы быға ишара. Халҡыбыҙ йырҙарының мәңгелек, һәр заманға ярарлыҡ мәғәнәгә эйә булыуҙарының да сере уларҙың "әйберләтә яҙма"лы "ҡош тел"ле булыуында бит.

Бер йыл миңә тимер юлы буйында урынлашҡан бер районда булып, ҡайтышлай "нисәнселер саҡрым" тип аталған станцияла өс сәғәткә яҡын поезд көтөргә тура килгәйне. Бер мәл аттарға, машиналарға тейәлеп, утыҙлаған йәштәр станцияға килеп төштө. Баҡтиһәң, яҡындағы ниндәйҙер бер башҡорт ауылында туй булып, шунан ҡоҙаларҙы оҙаталар икән. Араларында гармунсылары ла бар. Улар миңә һәм станцияла поезд көтөүсе башҡаларға өс сәғәткә яҡын бушлай "кәнсирт" күрһәтте. "Кәнсирт" тиһәң дә, исеме ҡалыр, йәштәр өс сәғәт буйына бер таҡмаҡ көйөнән бер куплетын ғына һыҙҙы. Һүҙҙәре түбәндәгесә ине:

*Аҡ тауыҡ ҡара булмай,*
*Аҡ тауыҡ ҡара булмай.*
*Аҡ тауыҡ ҡара булмағас,*
*Ҡара тауыҡ аҡ булмай.*

Ҡыҙмаса кешеләрҙең ошо рәүешле барыһы бер юлы бер туктауһыҙ бер үк һүҙҙәрҙе әйтеп ҡысҡырып йырлауын шунсама ваҡыт һуҙымында тыңлап ҡара. Етмәһә, шул таҡмаҡ ыңғайына бейегән булалар. Бейеүҙәре лә башҡортса ла, урыҫса ла, татарса ла түгел - һикерәләр. Һис юғы, пластинкаларының икенсе яғын да әйләндермәйҙәр бит.

*Зәйнәп сабый ғына - бала-саға менән сана шыуырға сыға ла китә икән, бай эңер төшкәс быны эҙләп алып ҡайта икән... Зәйнәп ауылын, туғандарын шул тиклем һағынған, кемдер аша әйберләтә хат ебәрә алған. Хатында ҡош ҡаурыйы, һары сәскә, көл менән күмер һалынған. Ҡош ҡаурыйы - ҡанаттарым булһа осоп ҡына ҡайтыр инем, һары сәскә - һағындым-һарғайҙым, күмер менән көл - һеҙҙе күрергә өмөттәрем һүнде инде, тигәнде аңлатҡан, тип һөйләгәйне Фазила әбейем. Ысынлап та, бер Йәғәфәр исемле генә малай тыуҙырғандан һуң, һарыға һабышып үлгән Зәйнәп...*

***✓ Назар Нәжми Яҙыусылар союзындағы секцияла Рәшит Назаров "Йөрәк" шиғырын уҡығанда тетрәнеп аяғүрә баҫыуы хаҡында яҙып сыҡты. Бер-берећенә үтә яҡын кешеләр улар Буранбай сәсән менән Рәшит Назаров.***



# ҠОШ ТЕЛЕ... 2

## иң боронғо яҙмалары

**Г. Ситдиҡова**: Тәбиғи, халыҡ йырҙарын урыҫ теленә тәржемә итеү бик ҡатмарлы. Бына "Тәфтиләү" йырының икенсе строфаһы:

*Аҫтындағы эйәр атҡа*
*тейер,*
*Эйәре лә белмәҫ, ат белә.*
*Тәфтиләүҙең ҡылған,*
*ай, ҡәһәрен*
*Үҙе белмәһә лә, ил белә.*

Баштан уҡ һуңғы юл тураһында әйтеп китергә теләйем. Беҙ бәләкәй саҡта ишеткәндә бында ил урынына халыҡ була торғайны. Минеңсә, халыҡ тип яҙылһа, ритмдан сыға тип үҙгәрткәндәрҙер. Шул рәүешле рифманы боҙғандар. Ә беҙҙең халыҡ йырҙарында рифмалар һоҡланғыс камил булыуы менән таң ҡалдыра. Ҡағиҙәләр үҙгәртелгәнгә тиклем "халҡ" тип яҙып та йөрөй торғайныҡ. Һөйләштә лә бер ҡыйынлыҡһыҙ бер ижекле һүҙ булып ҡулланылды (тик беҙҙең ҡатайҙа ул "һалҡ" тип әйтелә ине).

Бына шул эстәлеге, шағирәнәлеге, халҡыбыҙҙың телмәр байлығы, кинәйәле фекер йөрөтөү үҙенсәлеге йәһәтенән даһи кимәлендәге 4 юлдың урыҫсаға тәржемәһен уҡып ҡарайыҡ:

*Его седло спину лошади*
*натерло,*
*Седло об этом не знает,*
*лошадь знает.*
*Тевкелевым совершенные,*
*ай, злодеяния,*
*Сам он хотя не осознает,*
*страна знает.*

Бындай ҙа зауыҡһыҙлыҡты күргәнем булмағайны. Ситкәрәк китеп, тәмәке тартҡан берәүһе менән һөйләшеп ҡарағайным, баҡтиһәң, улар өс көн буйына туйҙа ла тик шул йырҙы йырлаған да, шул көйгә бейегән икән. "Пунятны" тип ҡуйҙым теге егеткә. Ә бит бындай арзан йырҙар һәм таҡмаҡтар быуа быуырлыҡ. Шуларҙың тағы берећенең һүҙҙәре:

*Ырымбурға барған саҡта*
*Бәләбәй һулда ҡала.*
*Ырымбурҙан ҡайтҡан саҡта*
*Бәләбәй уңда ҡала.*

Һеҙҙең менән килешәм, Гүзәл ханым, йырҙарыбыҙ һүҙҙәренең образлы кинәйәһен, йәғни ҡош телен аңламағас, уларҙы башҡа телдәргә тәржемә иткәндә лә кинәйәһенә ҡарап эш итеү урынына тура-нан-тура һуҡтырыу бар. Шундай тәржемәсәләргә "Сибай" йыры миҫалында пародия ла әтмәләп ҡараным бер саҡ. Пародияның ике юлы:

*Зеленая ла сана, синяя дуга*
*Запрягайка, Фатимушка,*
*на прямого коня...*

Рәхмәт, әлбиттә, тәржемәсегә, әммә ул йыр тексының ҡош телен белмәүе арҡаһында, строфаның мәғәнәһен бөтөнләй ҙә асып бирә алмаған. Ә башҡортса аңламаған кешеләрҙең, тәржемәне уҡығас, мыҫҡыллы йылмайыуын күреп, йән әсене. Йырға пародия килеп сыҡҡан.

Ғәмәлдә, нимә тураһында һүҙ бара һуң был юлдарҙа? Тәүге ике юл - тәхет эйәһе тураһында. Эйәр - тәхет, ат - халыҡ. Тәхеттең ниндәй ауыр баҫҡанын, имгәткәнен тәхет эйәһе белмәй, халыҡ белә. Артабанғы ике юл тәғәйен шәхесте, ошо тәхет мәнфәғәттәрен яҡлап, вәхшәт ҡылған Тәфтиләүҙе атай. Быны шулай еңелелпе генә тәржемә итеп буламы ни?

Ошо йәһәттән "Хан ҡыҙы" йырын халҡыбыҙҙың йырҙарҙа ҡулланылған символдарының, кинәйәләренең үҙенсәлекле һүҙлеге тип һанайым, сөнки тәүге ике юлдағы һорауҙа теге йәки был сифат атала ла, яуапта ниндәйҙер символик образ килтерелә:

*- Хан ҡыҙы, ас ишегең, мин керәйем,*
*Һинең буйың зифа, тиҙәр, мин күрәйем.*
*- Минең буйым күреп, һиңә ниҙәр файҙа,*
*Ағиҙелдә буй-буй ҡамыш күрмәнеңме?*

*- Хан ҡыҙы, ас ишегең, мин керәйем,*
*Һинең йөҙөң нурлы, тиҙәр, мин күрәйем.*
*- Минең йөҙөм күреп, һиңә ниҙәр файҙа,*
*Һауалағы тулған айҙы күрмәнеңме?*

*- Хан ҡыҙы, ас ишегең, мин керәйем,*
*Һинең сәсең ҡара, тиҙәр, мин күрәйем.*
*- Минең сәсем күреп, һиңә ниҙәр файҙа,*
*Баҙарҙарҙа ҡара ебәк күрмәнеңме?*

*- Хан ҡыҙы, ас ишегең, мин керәйем,*
*Һинең тешең ап-аҡ, тиҙәр, мин күрәйем.*
*- Минең тешем күреп, һиңә ниҙәр файҙа,*
*Сауҙагәрҙә ынйы-мәрйен күрмәнеңме?*

Ысынлап, ҡара ебәк тигәндә уйыбыҙға оҙон ҡара сәстәр, ынйы тигәндә - тештәр, ҡамыш тигәндә зифа буй-һын йоғашырға ғына тора бит. Йәнә ҡарлуғас ҡанаттары тигәнде иҫкә төшөрәйек - быныһы, әлбиттә, һылыу ҡыҙҙың ҡаштары.

Башҡорт шиғыры ла, ғәмәлдә, шәрҡи традициялар менән бер рәттән, шул традицияларҙы дауам итә. Тик беҙҙе шиғыр аңларға, яратырға өйрәтәләрме һуң мәктәптә? 10 йәшкә тиклем, ғәҙәттә, һүрәтләү һалынған шиғырҙар уҡыталар. Шул йәштән һуң кеше ғашиҡ булғанға ҡәҙәр шиғыр уҡымай тиерлек (психологтар өйрәнгән). Бына ғашиҡ булғас, йәнә бер мауығып алалар. Шунан йә шағир булып китәләр, йә бөтөнләй "һаңраулаланалар". Урталыҡта күпмелер шиғыр ятраҡан кеше ҡала. Бына нәҡ башҡорт кинәйәһе менән яҙылған даһи шиғыр:

*Йыртып астым күкрәгемде,*
*Йолҡоп алдым йөрәгемде*
*Һәм йомарлап устарыма,*
*Илттем уны дуҫтарыма.*
*Илттем уны һиңә, йәнем.*
*Тик күрмәнең ниңә, йәнем?*
*Хурланып мин шул саҡ бик тә,*
*Йөрәгемде аттым күккә,*
*Осто йөрәк, осто йөрәк*
*Йондоҙҙарҙан бейегерәк.*
*Йәнем! Әгәр сыҡһаң тышҡа*
*Таңын, ҡара көнсығышҡа,-*
*Бер йондоҙ унда нур һипһә,*
*Һәм хистәрең дөрләп китһә,*
*Бел: был йондоҙ - минең йөрәк,*
*Тик инде ул бейегерәк.*

Даһи Рәшит Назар яҙған быны!

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** Мин әле Буранбай сәсән хаҡында роман яҙам. Тәүҙә бындай типтағы проза әҫәре яҙыу логикаһы буйынса Буранбайҙың тормош юлына бәйле тарихи документтарҙы, факттарҙы өйрәнеп, әҫәрҙең сюжетын шул принцип буйынса ҡороп, байтаҡ ҡына яҙғас, хаталанғанымды аңланым. "Йөрәк" шиғыры кеүек үк даһи "Буранбай" йырының яҙылыуына бәйле сәсәндең яҙмышын өйрәнгәндә шуға иғтибар иттем: ерҙәге кеше-йәмғиәт-тәбиғәт мөнәсәбәттәре аша ғына был йырҙың яҙылыу сәбәбен аңлатып булмай. Бында илаһилыҡ бар. Көйҙөң эске мәғәнәүи яңғырашы, моң йөкмәткеһе тик изгелек, тик ғәҙеллек, тик хәҡиҡәт өсөн йәнен фиҙа ҡылған кешенең йән иңрәүе, күңел һыҡтауы тураһында. Йырҙа кешелеккә ҡарата ҡырҡа протест яңғырай: донъяға тик яҡтылыҡ, тик яҡшылыҡ өҫтәргә килеп тә, шул уҡ донъяның һәм кешелектең үҙен шундайын ғазаптарға дусар итеүҙәренә ҡаршы протест белдереү, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы йөрәк ихтилалы...



***"Йөрәк" шиғыры кеүек үк даһи "Буранбай" йырының яҙылыуына бәйле сәсәндең яҙмышын өйрәнгәндә шуға иғтибар иттем: ерҙәге кеше-йәмғиәт-тәбиғәт мөнәсәбәттәре аша ғына был йырҙың яҙылыу сәбәбен аңлатып булмай. Бында илаһилыҡ бар. Көйҙөң эске мәғәнәүи яңғырашы, моң йөкмәткеһе тик изгелек, тик ғәҙеллек, тик хәҡиҡәт өсөн йәнен фиҙа ҡылған кешенең йән иңрәүе, күңел һыҡтауы тураһында. Йырҙа кешелеккә ҡарата ҡырҡа протест яңғырай: донъяға тик яҡтылыҡ, тик яҡшылыҡ өҫтәргә килеп тә, шул уҡ донъяның һәм кешелектең үҙен шундайын ғазаптарға дусар итеүҙәренә ҡаршы протест белдереү, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы йөрәк ихтилалы...***

Ә бит Рәшит Назаровтың шиғырында ла шундай уҡ ихтилал. "Буранбай" йырын шағирә Рәмзилә Хисаметдинова "Бындай йырҙар баҫып йырланыла, бындай йырҙар ултырып йырланмай..." тип баһалаһа, Назар Нәжми Яҙыусылар союзындағы секцияла Рәшит Назаров "Йөрәк" шиғырын уҡығанда тетрәнеп аяғүрә баҫыуы хаҡында яҙып сыҡты. Бер-берећенә үтә яҡын кешеләр улар Буранбай сәсән менән Рәшит Назаров. Әгәр ҙә йырҙағы һәм шиғырҙағы лирик герой урынына милләтебеҙҙе ҡуйһаҡ, мәғәнәһе үтә ҙурая һымаҡ. Шулай түгелме?

Теманан саҡ ҡына ситләшеп булһа ла, Буранбай сәсән менән шағир Рәшит Назаровтың яҙмыштарының үтә аяныслы булыуҙары хаҡында ла әйтеп үтергә кәрәктер, тием. Ярай, Буранбай сәсән үҙенең йән яныуын йырына күсергән, дин юлындағы кеше булараҡ, Аллаһҡа мөрәжәғәт итеп, күңелен йыуатҡандыр. Ә бына бөтөнләй башҡа заманда һәм мөхиттә йәшәгән Рәшит Назаров иһә, йән яныуына дарыу эҙләгәндә, яуапты хәҡиҡәттә, йәғни Хаҡ Тәғәлә хозурында эҙләгәндер ҙә, был даирәгә рөхсәтһеҙ, йәғни бисмилла-һыҙ халәттә инеүе һөҙөмтәһендә шул хәлгә ҡалғандыр, тип тә уйланыла. "Бөйөк кешеләр ерҙә түҙеп тора алмаҫлыҡ ауырлыҡтарға дусар ителһә, Хоҙай Тәғәлә уларҙы үҙе янына ала йә аҡынан мәхрүм итә", тигән бит Италия ғалимы һәм медигы Чезаре Ломброзо.

**Г. Ситдиҡова:** Бик дөрөҫ тотоп алғанһың был фекерҙе!

Бер мәл "Быяла болан" тигән шиғырымды бер нисә кешегә уҡып ишеттерҙем. Әхмәр, хәтерендәме, һин шунда уҡ миңә кинәйәне әйтеп тә бирҙең. Ә байтаҡтар аңламаны. Ҡатмарлы булмаһа ла. Бына ул:

*Балаға бүләк биргәндәр-*
*Быяла болан һыны,*
*Алған да ирекә ебәргән,*
*Ҡолдай тотмаған уны.*
*Сабып сығып киткән болан*
*Үҫмер ҡалмай бер тотам,*
*Йәнәһе, ул да етеҙ бит,*
*Кәрәкһә, хәҙер тота.*
*Болан уҙған юлдан сапҡан,*
*Ҡарамай тауын, һыуын,*
*Тоттормай ҙа, юғалмай ҙа*
*Быяла болан һыны.*
*Ҡолаҡта һыҙғыра йылдар*
*Елдәй елдереп кенә,*
*Менмәҫтәй кеүек үрҙәргә*
*Егет йүгереп менә.*
*Ҡыуып еттем, тигәнендә*
*Ватыла ҡуя болан,*
*Ғәжәпләнеп туҡтай кеше -*
*Был донъяға ни булған?!*
*Ашыҡҡан да ашыҡҡансы*
*Быяла болан ҡыуып,*
*Ә йәшәргә ул онотҡан,*
*Ҡыуғаны булған ҡыуыҡ.*
*... Әй алдап донъя йүгертә,*
*Быяла болан булып.*

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** Һеҙҙең "Быяла болан"шиғырындағы "быяла болан" образын мин үҙемдең бер шиғырымда "күбек ялаусы малай" сүрәтендә күргәйнем. Ә бит шиғриәттә генә түгел, тормошта ла "быяла болан", "күбек" рәүешендәге ымһыныуҙар һәм алданыуҙар булмаһа, беҙгә ҡайһылай күңелһеҙ булыр ине, тием. Бында шағир, ғөмүмән, ижадсы икеләтә бәхетле, сөнки ул шул уҡ ымһыныу-алданыуҙарҙы кинәйә рәүешендә файҙаланып әҫәр ижад итә, ымһынһа ла, алданһа ла, был халәтенең барыбер "файҙаһын" күрә.

Кинәйәнең, образлылыҡтың әһәмиәте, һеҙ әйткәнсә, тап шундалыр ҙа, йәғни ул төрлө кешелә төрлөсә фекер тыуҙыра алыуында. Әгәр ҙә ижадсы һәм уны ҡабул итеүсе алдына шундай талаптар ҡуйылмаһа, ғөмүмән, ижадтың да кәрәге ҡалмаҫ ине. Беҙ барыбыҙ ҙа бер алма һүрәте төшөрөп ҡуйыр инек тә, уның аҫтына "Был - алма" тип яҙыу менән генә мәшғүл булыр инек, моғайын. Донъя бит һәр кемгә үҙ ҡарашы менән ҡабул ителгәне өсөн матур. Башҡаларға оҡшағаны өсөн түгел.

**Г. Ситдиҡова:** Әле шиғриәттә тота ла шул ҡайын, шул аҡҡош, шул имән, шул болоттар, шул томан, шул шишмә образына ҡайтабыҙ - ҡаныбыҙға һеңгән ҡош теле шунда килтереп сығара бит. Иҫкергән образдар тип күпме тәнҡитләп маташмайыҡ, мәҡәл, әйтем, ҡарһүҙ - бик универсаль йоҙаҡ, асҡысы төрлө булыуы мөмкин. Әле бына ике һанға һуҙылған әңгәмәлә һин - үҙ асҡысың, мин үҙемдеке менән асып ҡараныҡ был йоҙаҡты.

Һинең менән әңгәмә башлағас, көтмәгәндә бер нисә минут эсендә ошо юлдар аҡ ҡағыҙға төшөп ятты:

*Бәҫ өҫтәр яҡшылыҡ күрһәм-*
*милләтемә мин яусы,*
*Көндәрем хеҙмәттә үтә -*
*милләтемә мин ялсы,*
*Милләт өсөн хәүеф тыуһа,*
*булалам утлы ҡамсы,*
*Халҡым ҡанынан тамғанмын -*
*башҡорттанмын бер тамсы...*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәнең аҙағында күп нөктәләр тороуы ла аңлашылалыр, хөрмәтле уҡыусылар. Үҙ фекерҙәрен әйтергә теләүселәр өсөн фекер ҡоро асыҡ көйө ҡала. Рәхим итегеҙ!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

✓ ***- Ир-егеттәр бөтөүгә дусар ителгән зат, - машина хужаһы әңгәмәне элеп алды. - Быны ғалимдар иҫбатлаған инде. Енестәрен билдәләгән хромосома зәғиф, ул йайлап гендарын юғалта бара һәм эшлектән сығасаҡ. Малайҙар тыумаясаҡ!***






Байгилде МОТАЛЛАП

# "Бөтә ирҙәр ҙә кәбәхәт..."

Фантасмагорик хикәйә

* * *

Ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ араһындағы көсөргәнеш ҡыҙыу нөктәһенә еткән дәүер хәҙер. Әгәр быға тиклем йәмғиәт именлеге ҡатын затын баҫмаҡлау иҫәбенә атҡарылһа, хәҙер быуа йырылды. Енестәр тигеҙлеген дәүләт үҙе ҡурсалай. "Ҡатын-ҡыҙҙы баҫмаҡлау" тиеү, асылда, тапҡыр булмаһа ла, йәмғиәттә был фекер өҫтөнлөккә сыҡҡан.

Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте менән Әҙәм камил зат итеп балсыҡтан яратылһа, Һауаны бар ҡылыу өсөн уның ҡабырғаларын алыуҙы зарури тапҡан Раббыбыҙ. Тыйылғанға оронол, йәннәттән ҡыуылһа ла, кешегә, Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәте арҡыры ерҙә мул түл йәйеп, бөтә тарафтарға таралып ултырырға насип тейҙе. Уның ерҙә ожмахтай тормош ҡорорға йөрьәт итеүенең бөтә ғилләһе бер бөтөндөң икегә бүленеп, ике енестең бер-береһенә терәк-таяныс булып ғүмер кисеүендә түгелме ни? Ҡатын бала баҡмаһа, усаҡтың йылыһын һаҡламаһа, ир һунарға йөрөмәһә, яу сапмаһа, Әҙәм менән Һауаның тоҡомдары бөгөн ҡайҙа булыр ине?

Эйе, кеше ерҙә ожмахтай тормош ҡорҙо. Тик рәхәтлеккә сыҙай алмай, инде ерҙән дә ҡыуылырға ҡырсына, үҙен-үҙе тағы ла ауырлыҡтарға, тағы ла хәсрәткә этәрә.

...Ҙур сәхнә. Зауыҡлы декорация. Артистарҙың күплегенә, кейемдәренең затлылығына хайран ҡалырлыҡ. Тик улар, үҙҙәренә тәғәйен ролдә башҡармай, бер-береһен эләкләп тик йөрөй. Күпмелер ваҡыт үткәс, туҡтайҙар, парлашып ҡара-ҡаршы торалар ҙа, ҡулдарын болғап, кем уҙарҙан береһенә ҡысҡыра башлайҙар. Ҡайҙа ир, ҡайҙа ҡатын кеше икәнен белмәҫһең. Ирмәк күренеш. Тамашасы тәүҙә, шулай кәрәк икән тип, диҡҡәт китеп ҡарай, тора-бара аптырауға ҡала, шунан орошоуға күсә. Шул мәл тамаша кинәт үҙгәрә. Халыҡ һирәгәйә, артистар бер-береһенә иғтибарҙы юғалта. Бөтөнләйгә юғалта! Башҡаны күрмәйҙәр ҙә, ишетмәйҙәр ҙә. Әйтерһең дә, ҙур сәхнәлә яңғыҙ үҙҙәре. Нимәлер эшләйҙәр, үҙ алдарына һөйләнәләр, ә йөҙҙәре ҡатып ҡалған битлек тиерһең. Залдағылар баяғынан да нығыраҡ аптырай. Һуңғы сиктә тамашаны ҡалдырып сығып китә.

Гениаль режиссерҙың тормошобоҙҙоң бөгөнгөһөн һәм иртәгәһен сәхнәләштергән тамашаһын бер кемдең дә ҡабул иткеһе килмәй. Сөнки улар үҙҙәре лә буталған, хәтерҙәрен юйған, иҫһеҙләнгән.

* * *

–Тәҡәтем ҡороно. Ана, ир-атҡа анһат, торған көйө улай-былай итеп хәжәтен йомошланы ла - ҡәнәғәт! Рәхәтләнеп тәмәкеһен көйрәтә, - Фариза ситтәрәк торған иргә ымланы. Юлдашы, эйе шул, тигәнде аңлатып, баш ҡаҡты.

Оло юл сатында йәйрәп ятҡан Юлтый ауылының автобус туҡталышында дүрт кеше ылау көтә - урта йәштәрҙәге ике ҡатын, йәш бала һәм баяғы ир йораты. Фариза байтаҡтан бирле тилмереп, ишеге ҡайырылып алынған бәҙрәф яғына ҡарай ҙа, уфтанып ҡуя. Ир кеше инеп сыҡты унда. Ә ул инә алмай, ишеге юҡ...

-Урам осондағы анау ихатаға барып килмәһәм булмаҫ, түҙемем ҡалманы. Юлда әллә күпме бараһы әле, - тип Фариза юлдаш ҡатынға хәлен аңғартты.

-Бергәләйек, булмаһа. Балаң, әйберҙәрең менән нисек барып етәһең. Минең дә ул йомошом яҡынлай, - тине уныһы.

- Автобусҡа һуңлап ҡуймаһаҡ ярар ҙа ул.

- Ваҡыт бар һымаҡ, - ике ҡатын йәһәтләп ауыл яғына ыңғайланы.

Ҡабаландылар. Барыбыр автобус өлгөрөрәк булып сыҡты.

-Ҡәһәрең, йүгергәндә күрә тороп, көтмәне. Баяғы ирекәй аңғартһа ни булған, - Фариза, нәфрәтләнеп, автобус артынан йоҙроғон болғаны. - Ана, тағы ир отто. Беҙ, бисәләр, тороп ҡалдыҡ, ә ул йомшаҡҡа ултырып китеп тә барҙы. Бөтә тормош шулай ҡоролған. Тереклек итәбеҙ, тип, теш-тырнағыбыҙҙы ҡанатҡансы батырып, алға ынтылған беҙҙе улар ашаҡлап үтә. Аяҡтарын һөртөргә лә тартынмайҙар.

-Ҡуйсы, әхирәт, ул тиклем бөтөрөп ташлама ирҙәрҙе. Уларһыҙ беҙ ни ҡылыр инек...

-Ҡылабыҙ, нишләп ҡылмай, ти. Мына бит, ҡылып йөрөйбөҙ. Һинеке Себерҙә. Әллә аҡса, әллә груша һуға, тигәндәй, нимә эшләп йөрөгәнен, ошонан, һин беләһеңме лә, мин беләмме. Ә минекесе? Мең һылтау табып, бала менән ҙур тоҡсай йөкмәтеп, юлға сығарып ебәрҙе. Машина булмаһа, асыуым да килмәҫ ине. Эштән китә алмай, йәнәһе. Ул яуаплы урында, ә өс бала менән көнө буйы айкашҡан мин - домохозяйка, нуль. Эштән ул арып ҡайта, асыуым килмәһә. Асыға ла икән - шунда уҡ өҫтәлгә яҡынлай. Ҡасан ял итәһен, нисек бөтәһенә лә өлгөрәһең, тип һорау ҙа юҡ. Әсәйең ауырып китте, тип атайым шылтыратҡас, ялға тиклем түҙеп ултыра алманым, юлға сыҡҡайным. Быны инде ыҙа сигәм.

Фаризаның ата-әсәһе районда яуаплы урында эшләп ялға сыҡҡас, тыуған ауылдарына ҡайтып төпләнде. Үҙе Сибайҙа йәшәй. Тура автобус булмағас, ауылға ҡайтыуы мәшәҡәт: Юлтыйҙа төшөп ҡалып, райондан килгән маршрутты көтөргә кәрәк.

Уның ҡарауы, юлаусылар юл сатында артыҡ оҙаҡ йонсоп торманы. Өмөтһөҙ генә ҡул күтәреүгә яндарына мөһабәт сит ил машинаһы килеп туҡтаны. Руль артында йәш ҡатын ине.

-Ҡайҙа юлланды әхирәттәр? - йәш булыуына ҡарамай, күрәһең, тормоштоң артына тибеп йәшәй был һылыуҡай. Мөләйем йөҙөндә донъяһы түңәрәк кешегә генә хас ихласлыҡ, булмышында - кинәнеү һәм нимдәйҙер сихри серлелек.

- Морапталға беҙгә.

-Юлығыҙ уңды, тимәк. Рәхим итегеҙ, - үҙе үк төшөп юлаусыларға машинаһының ишеген асты.

Кондиционерҙан еләҫ һауа өрә, талғын көй уйнай.

-Кейәү бала ҙур урында эшләйҙер, бигерәк зиннәтле машина, - Фариза башланы һүҙҙе.

-Кейәү бала юҡ, апай. Малды үҙем табам, кинәнеп йәшәйем.

- Китсе, булмаҫ. Машинаң кәм тигәндә миллион ярымлыҡ, - Фаризаның ошо ҡыҙ баланың шундай ҙур аҡса эшләүенә ышанғыһы килмәне.

-Нишләп эшләмәҫкә һуң? Бизнесем бар. Ҡалала ике ҡатлы йорт та төҙөп ултыртҡанмын.

- Даланлы һунарсы аулар зиннәтле кейек икәнһең. Алтын ситлектәге.

- Ха, тотторор та ҡуйырмын әле. Кәрәктәре бар ине. Кемдер өсөн йыйған хазинам, тәләфләр йәшлегем юҡ.

-Атаҡ, кейәүгә сығырға уйламайһыңмы ни? - Фариза бот сабып аптыраны.

- Апайҙар, һеҙ минән күп булһа тиҫтә йәшкә өлкәнһегеҙҙер. Ошо ун йыл эсендә тормош шул тиклем үҙгәрҙе, алға китте, һеҙ уны күрмәй ҙә, белмәй ҙә ҡалғанһығыҙ. Хәҙер беҙ, йәштәр, интернетта йәшәйбеҙ, аралашабыҙ, сауҙа итәбеҙ, партнер табабыҙ. "Бөйрәкәй"ҙә Таңсулпан апай яҙа бит "ит үлтереү" тураһында. "Ит үлтерергә" кәрәк булһа, партнерыма интернет аша ымлаһам, шунда уҡ килеп тә етә. Эште рәтләгәс, сығып олаға. Бер-беребеҙҙе бимазаламайбыҙ, көнләшмәйбеҙ, хаҡын һорамайбыҙ. Ул да риза, мин дә.

- Уйнаш була түгелме һуң был?

- Ниндәй уйнаш булһын. "Ит үлтереү" тинем дәһа.

- Ә бала? - Фаризаға юлдашы ла ҡушылды.

-Ваҡыты еткәс, үҙемә иптәшкә табып алырмын әле.

- Ҡыҙ теләйһеңме ни?

-Ҡыҙ булмай һуң. Миңә ҡартайғансы имсәк һорап йөрөгән тинтәк кәрәкмәй, - ҡатындар бер-береһенә аптыраулы ҡараш ташлап ҡуйҙы.

Урынлашҡан тынлыҡты радио тауышы боҙҙо. "Биләрит ҡалаһында бер ай элек юғалған ҡыҙ баланың үле кәүҙәһе табылды. Енәйәт ҡылыуҙа баланың үгәй атаһы ғәйепләнә. Тәфтишселәр белдереүенсә, ул ҡыҙҙы көсләгән һәм үлтергән. Кәүҙәһен һарай эсенә күмгән".

-Бындай йыртҡыслыҡҡа нисек бара кеше? Гонаһһыҙ баланы мәсхәрәлә, йәнен ҡыйсәле. Әсә тыуҙырмағандыр ул хайуанды, - Фариза балаһын күкрәгенә ҡыҫты. Күҙе йәшләнде.

Һәр кем был үтә лә ауыр һәм ҡурҡыныс хәлдә үҙ йөрәгә аша үткәреп, тынып ҡалды.

-Ирҙәргә әллә ни булды. Йә гомиктар, йә педофилдар. Унан ҡалһа - экскеселәр, наркомандар, - Фаризаның юлдашы һүҙгә килде. - Үҙемдекенә, былай, һүҙ тейгеҙә алмайым.

-Уйлап ҡараһаң, минеке лә насар кеше түгел, - Фариза ла хәләле тураһында ыңғай һүҙ ҡатыуҙы кәрәк тапты. Гел генә абышҡаһын тиргәргә күнегел алһа ла, күҙгә күренмәгән, күңеле менән тойомлаған билдәле бер сиктән сыҡҡаны юҡ. Уның арьяғына үтһә, кирегә ҡайтарып ала алмаҫлыҡ яңылышлыҡ ҡылыуын ул белә.

- Ир-егеттәр бөтөүгә дусар ителгән зат, - машина хужаһы әңгәмәне элеп алды. - Быны ғалимдар иҫбатлаған инде. Енестәрен билдәләгән хромосома зәғиф, ул яйлап гендарын юғалта бара һәм бер мәл эшлектән сығасаҡ. Малайҙар тыумаясаҡ! Күҙ алдына килтерә алаһығыҙмы, апайҙар, ирҙәрһеҙ тормошто? Баланы ҡайҙан алырбыҙ икән - бына ҡыҙыҡ һорау. Хәйер, килеп тә еттек.

* * *

–Ҡыҙым ҡайтҡан! - шатлығынан ике баҫаһын бер баҫып, Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы ҡунаҡҡа уҡталды. Ауырыу кешегә бөтөнләй оҡшамағайны.

Әғҙәм ҡарт та күренде:

- Иҫән килеп еттеңме, балам? - ҡыҙының һораулы ҡарашына, аҙаҡтан барыһын да аңлатырмын, тигәндәй ымланы ла, өйгә әйҙүкләне.

Фариза күстәнәстәрен сығарҙы, йонсоған балаһын тәрбиәләне. Сәйгә ултырғас, әләнән әле атаһына текләне, әсәһенең һәр хәрәкәтен күҙәтте, һүҙҙәренән үҙенә кәрәк мәғәнә эҙләне. Тик шик-шөбһәгә ҡалырҙай бер ни күрмәне.

-Әсәй, хәлең нисек, ауырымайһыңмы? - тағы ла атаһына ҡарамай булдыра алманы Фариза. Уныһы, артығын иҫкындыра күрмә, тигәндәй, ҡашын йыйырҙы.

-Ҡарттарса инде, балам. Шөйлә бирешергә иҫәп юҡ...

Табындан торғас, әсәһенең тышҡа сығып китеүенән файҙаланып, Фариза атаһынан һорау алырға кереште:

- Ниндәй ауырыу тураһында һөйләнең, атай? Миңә ҡалһа, әсәй йәшәреп тә киткән һымаҡ.

- Бөтә хикмәте шунда ла инде. Сире тәнендә түгел, зиһенендә. Башында! Ситтән иғтибарлыраҡ байҡа әле, хыялый кеүек тота үҙен.

- Китсе, күҙеңә күренәләр. Мин бер нәмә лә һиҙмәнем.

Ауыл тормошоноң мәшәҡәттәре киске һауын менән генә тамамлана. Был эште лә ослап ҡуйғас, ҡатындар һил булып ҡалған баҡсалағы эскәмйәнән урын алды.

-Ауылдың ошо кистәрен һағынам, әсәй, - Фариза ҡәҙерле кешеһенә һыйына бирҙе лә, башын уның күкрәгенә һалды. - Рәхәт миңә эргәңдә.

- Ауылды маҡта ла ҡалала йәшә, тиһәләр ҙә, эйе, был хозурлыҡҡа ни етә, балам... Ҡыҙым, мин алыҫ киләсәктә күрәм, ул заманда былайтып ирәбеләнеп ултырыу булмаясаҡ. Кеше башҡа төрлө, башҡа уйлы, башҡа хисле буласаҡ, - Фариза башын ҡалҡытып, әсәһенә текләне. Әллә ҡайҙарға алыҫҡа төбәлгән уның ҡарашы ят һәм аңлатып бөтмәҫлек һағышлы ине. Йөҙө лә бөтөнләй икенсе кешенекә. - Ятайыҡ, һуң инде, - кире ергә ҡайтты Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы.

Сәләмәтме ул? Бигерәк ятын хәбәр ҡатып ҡуйҙы. Үҙе фанилыҡтан айырылғандай, ҡайҙалыр талпынып ултырҙы. Тимәк, атаһы юҡҡа шикләнмәй.

* * *

Һаҡ йоҡланы Фариза. Ҡайһылыр мәлдә иҙән шығырҙап ҡуйғанын ишетте. Аяҡ тауыштары тышҡы ишек яғына ыңғайланы. Иплəп кенә тороп, төнгө тыныслыҡты боҙоусының артынан сыҡты. Солан тәҙрәһенә күҙ һалғайны, баҡсала, алма ағасы төбөндә, аҡ күләгәне шәйләне. Еләҫлек өсөн күҙе алынып, селтәр ҡапланған тәҙрә өлгөһөнә ҡолағын терәне. Әсәһе теҙләнеп күккә баҡҡан килеш ҡулдарын һауаға күтәреп, кемгәлер ялбара ине. Төнгө һиллектә шыбырлап әйтелгән һүҙҙәр алыҫҡа тарала.

- Тәңрем, мин һинең тоғро ҡолоң, һиңә табынам, тыйғаныңдан тыйылам, изге юлыңдан тайпылмайым, важибтәң тоғро атҡарам. Мин яңылыштым, күңелемдәген түгел, уйымдағын әйттем. Быны мең-мең тапҡыр ҡабатларға, теҙләнеп көндәр буйы торорға ризамын. Бер үк харап итмә Әҙәм затын. Кеше бит һәр саҡ ярлыҡауға мохтаж, аҙым һайын яңылыша, яҙа баҫа. Мин дә яңылыштым, кәрәкмәгән һүҙ ыҫҡындырҙым. Ғәмәлем был юҫыҡта тоғро. Хәләл ефетемә һәр саҡ тоғромон, әйткәненән сыҡмайым, юлын ҡыймайым, һүҙен йыҡмайым! Ир ҙә, ҡатын

да булмаһа, был донъяның йәме ҡасыр. Уҙҙырып, үҙ уй-фекеремде еткергәнгә ярлыҡай күр бәндәңде, Раббым, - Фариза әсәһенең күккә ялбарып өндәшкән һүҙҙәренән ошоларҙы айырым-асыҡ ишетте.

Тора биргәс, әсәһенең мыштым ғына инеп урынына ятыуын, үҙ алдына уҡыныуын шәйләне. Таңға тиклем күҙен йоҡо алманы. Тимәк, әсәһе ысынлап та ауырый. Эңерҙә баҡсала әйткән һүҙҙәрен иҫенә төшөрҙө: "...алыҫ киләсәктә былайтып ирәбеләнеп ултырыу булмаҫ. Кеше башҡаға төрләнер ..." - тине әсәһе. Әле килеп, Әҙәм затын харап итмә, тип ялбара Хоҙайҙан. Нимә күренә уның күҙенә, нимә тойомлай ул зәғиф аңы менән?

Ғүмер буйы бер-береһенә иғтибарлы һәм ихтирамлы булған ата-әсәһенә Фариза гел һоҡланып ҡараны. Башҡа ундай татыу ир менән ҡатынды күргәне лә юҡ үҙ ғүмерендә. Һөйөшөп, бар ғәләмде һоҡландырып, пар күгәрсендәй тормош ҡороп ебәрәләр ҙә, ике-өс йыл да үтмәй, эт менән бесәй шикелле талаша ла башлай йәштәр хәҙер. Әйтерһең, араларына ен керә. Үҙенең тормошон да байҡап сыҡты. Ғәбите насармы ни? Яҡшынан башҡа уға тағы ни әйтәһең? Эшсән, боҙоҡ ҡылмай, тапҡаны өйгә ҡайта. Шулай булһа ла ғаиләлә татыулыҡ юҡ. Нимә бүлешәләрҙер, Фариза үҙе лә аңлай алмай. Икәүһе лә уҡыған, һөнәрле, эш урындарында абруй ҡаҙанғандар. Нимә тураһында һүҙ сыҡһа ла, уның осо бәхәс, хатта талаш менән бөтөп ҡуя. Ошо юлға ла ҡалайтып енләнеп сығып китте үҙе. Хәҙер шул ҡылығы өсөн үкенеп ята ла, Ғәбите иртәгә килеп төшһөн, йәнен үртәп алыр өсөн тағы берәй сәбәбен табасаҡ. Нисек килеп еттең, балалар менән минһеҙ нисек донъя көттөң, тип тә һорамаясаҡ. Атаһы менән әсәһенең бер-береһенә ҡарата бер генә ауыр һүҙ әйткәндәрен ишетһәсе. Шайтан туй ҡорған был ерҙә улар әллә фәрештәме?

"Ир ҙә, ҡатын да булмаһа был донъяның йәме ҡасыр". Әсәһенең был һүҙҙәре нимәгә ишара? Был Фаризаның йоҡоһоҙлоҡтан интеккән зиһенен эләктереп алған һуңғы фекер ебе булды. Таң һарылана башлағанда ойоп китте. Тик йоҡоһо йоҡо булманы, һаташып сыҡты. Йәнәһе, Ғәбите сәйер йылмайып, томандар араһына инеп китә лә: "Һағынырһың, һағынырһы-ы-ың... Мин булмаҫмы-ы-ын...", - тип юҡҡа сыға.

* * *

Ҡояш һүрелә башлағанда Ғәбит, мәктәптә уҡып йөрөгән ике балаһын машинаһына ултыртып, ҡайны менән ҡәйнә йортона килеп төштө. Ауыл малайы булғанға ярата ул Морапталға йөрөргә. Ҡарттарҙың ихласлығы ла күңелен арбай. Тәне лә, йәне лә ял итә бында.

- Һуңға ҡалып йөрөйһөгөҙ, борсолоп бөттөм, - тип ҡәнәғәтһеҙлек белдергән ҡатынына артыҡ иғтибар итеп тә торманы. Һүҙен яуапһыҙ ҡалдырҙы.

Малды теүәлләп, мунса төшөп сыҡҡас, ҡайныһы менән баҡсалағы өҫтәл артынан урын алдылар. Сабыныуҙан сарсаған ирҙәр ҡала күстәнәсен - һыраны ләззәтләнеп һемерҙе. Йыбанып, бөтөнләй һүҙһеҙ ултырмаҫ өсөн генә гәпләштеләр. Машина, юл хәлдәре, һауа торошона ҡағылып үттеләр. Рәхәт ине уларға ошолай киске һиллектә ирҙәрсә ултырыуы.

Һыуһын алып берауыҡ ултырғас, ҡайны һүҙҙе етдиерәктән башланы.

- Фариза зарланып торасы, кейәүең тыңламай, тип.

- Ҡуйсы, ҡайным, хәҙерге ҡатындарҙың ғәҙәтен белмәйһеңме ни? Уларға бит - сығар ҙа һал. Нисек, ҡайҙан, күпмегә - уныһы ҡыҙыҡһындырмай уларҙы. Ярамай бит улай. Мин яуаплы урында, эш хаҡы зарланырлыҡ түгел. Шөкөр итә белһәң, етерлек. Нәфсене тыйыу ҙа кәрәк тәбаһа. Аҙна уртаһында ауылға нисек сығып китәйем тағы? Ялда йөрөп булһа, бик рәхмәт әле ул. Берҙә генә хәлгә керә белмәй шул Фариза. Тауыш сығарырға ғына тора.

- Аптырайым шул. Хәҙер халыҡ етеш йәшәй, ә татыулыҡ юҡ. Беҙҙең заман башҡараҡ булған икән.

- Туйып һикерә бисәләр, ирҙең ҡәҙере китте. Йомошсо малайға әйләндереп алдылар. Йә һуғыш сыҡмай, ир-егеттең бәҫе күтәрелер ине, - Ғәбит ҡайһылай тапҡыр әйттем, тигәндәй, ҡайныһына маһайыңҡырап текләп ҡуйҙы.

- Һүҙ юҡ, һуғыш - ирҙәр һөнәре. Ул алып килгән ҡайғы-хәсрәт иҫәбенә баһабыҙҙы күтәрергә ҡаламы инде улай булғас?

- Бәлки, беҙгә кеше булмышыбыҙҙы һаҡлар өсөн шул ҡайғы-хәсрәттең әйләнеп килеп тороуы мотлаҡтыр? Кинәнеп йәшәй белмәйбеҙ. Рәхәтлеккә сыҙамайбыҙ, тормош муллығынан асылыбыҙҙы юғалта башлайбыҙ. Әгәр ҡыр януарын йорт хайуаны урынына аҫыраһаң, ул урманда йәшәү һәләтен юғалта. Ашарына ла таба, дошманынан да һаҡлана алмай. Яу сапмаған ир ҙә, цирк аренаһына сығарылған арыҫлан төҫлө, үҙ асылын юғалта түгелме? Бисәләр урынында ҡалып барабыҙ бит. Ә улар беҙҙе эләкләй. Хәҙер хатта уҙҙырып та ебәрәләр әле. Һәр йәһәттән сәмләнеп өҫтөнлөккә ынтылалар. Эштә лә, өйҙә лә шулай. Салбарҙы һалмайҙар ҙа, сәсте лә ҡыҫҡа ҡырҡтыралар. Яман ғәҙәттәребеҙҙе лә үҙ итеп бөтөп баралар. Күпкә бармаҫ был хәл, бер осо сығыр. Насар булыр ул, бик насар, - тәрән уйға батҡан ҡайны кеше кейәүенең был һүҙҙәрен йөпләмәне лә, ҡаршы ла бер ни әйтмәне. Һүҙһеҙ генә торҙо ла, йортҡа ыңғайланы.

* * *

Фариза ике көн һағайып әсәһен күҙәтте.

- Атаң да, һин дә миңә текерәйеп тик йөрөйһөгөҙ, һиҙмәй тиһеңме әллә, - әсә кеше түҙмәне, хәтере ҡалып, ҡыҙына үпкәһен белдерҙе.

- Юҡсы, - уғрылыҡта тотолған бала шикелле Фариза ҡыҙарып бүртенде.

- Мин бит элекке Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы түгелмен, ә ерҙәге Тәңренең илсеһемен, - ҡатын, шыбырҙауға күсеп, тирә-яғына күҙ ташланы.

- Нимә? - Фариза көтөлмәгән был хәбәрҙән аҙап ҡалды һәм һорауын йотоп, ҡыҫҡа тында, ҡапыл ғына әйтте.

- Аулаҡҡа үтәйек. Бөтәһен дә баштан һөйләрмен, - тип, әсәһе Фаризаны өйҙөң төпкө яғына әйҙәне.

Ҡатын күтәрә алмаҫтай оло йөктән ошо аҙна-ун көн эсендә тамам миктәгәйне шул. Эс-бауырына таш булып ултырған хәбәрен кемгәлер һөйләмәһә, аҡылынан яҙыр төҫлө. Күктән төшкән әмерҙе үҙ ҡолаҡтары менән айырым-асыҡ ишетте, зиһененә һеңдерҙе. Әммә артабан ым-ишара булмағас, ни ҡылырға ла белмәй хәҙер. Төшөнә ниндәйҙер билгеләр, ят тормош күренештәре кереп йонсота. Бәлки, бөтә хикмәт шул төштәрҙәлер. Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы уларҙың айышына бер нисек тә төшөнә алмай. Йыш ҡына төрлө сүрәттә һаҡалтай ирҙе күрә. Ул һәр саҡ бала күтәргән була. Бик ҡәнәғәт ҡиәфәттә. Теле аңлайышһыҙ. Шуны белгәндәй, ымлап өндәшә. Йә кәштәлә ятҡан ҡалын китапҡа төртөп күрһәтә, йә ҡулындағы баланы, күр, хәтерендә ҡалдыр, тигәндәй, әйләндереп тулғандыра. Уныһы иламай, кинәнеп йылмая ғына. Артабан тауышһыҙ кинохроника тиерһең: матур ҡалалар, йыһан караптары, бер төҫ-ҡиәфәтле кешеләр ағымы теҙелеп китә.

- Ергә атәстәр килә! - Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы, төпкө бүлмәгә уҙғас, өҙөлгән һүҙен дауам итте.

- Нимә? - Фариза, башҡа һүҙ белмәгәндәй, тағы "нимәһен" һүҙҙы.

- Белеп торам, мине аңлаусы юҡ бында. Булыуы мөмкин дә түгелдер. Әүлиәләр гел эҙәрлекләнгән, йәберләнгән, яҙаланған. Нисек кенә булмаһын, мин юғарынан бирелгән тәғлимәтте барыбер кешегә еткерергә тейешмен, бурысым оло һәм етди. Уның әлегә миңә башы ғына билгеле. Тәңребеҙ хөкөмөн сығарҙы: Әҙәм менән Һауа балалары урынына ергә атәстәрҙе ебәрә, - Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы үҙенә төшөрөлгән хәбәрҙе түкмәй-сәсмәй ҡыҙына һөйләп бирҙе. Уныһы йә тере, йә үле, тигәндәй, һынағастай ҡатып тыңланы. Ҡымшанырға ла ҡурҡып ултырҙы. - Өнөмдә күрҙем, төшөмдә түгел: күк көмбәҙе шаршау кеүек асылып китте лә, унан тауыш килде. Күктең асылған урыны йәйғор төҫтәрендә сағыу емелдәп торҙо. Тауыштың эйәһе күренмәне.

- Әллә ауырыйһыңмы, әсәй?

- Юҡ, ауырымайым! - Әсәһе ҡаты һәм уҫал итеп әйтте быны. Оңҡот түгелһең, ышан, ҡабул ит, тип әмер биргәндәй. - Мин дә кешенең урынына атәстәрҙең килеүен теләмәйем, быны ялбарып Раббыбыҙҙан һорайым. Кеше үҙгәрер, үҙ булмышына кире ҡайтыр, тием. Беҙ бит хәләл ефетем менән тоғро юлдан йөрөйбөҙ, башҡаларға үрнәкбеҙ, аңы булған эйәрә беҙгә, тора-бара ундайҙар артҡандан-арта барыр, тием.

- Әсәй, бәлки, Хоҙай Тәғәлә һиңә әҙәми заттарҙың фиғеленә ҡағылған зәхмәтте дауалаусы булырға ҡушҡандыр, кешене юҡ итәм, тип әйтмәгәндер. Яңылышманыңмы икән? - Фариза әсәһенә ышанған булып ҡыланырға, яйлап уны табиптарға күренергә күндерергә булды.

- Фариза, һин минән көлөргә була шулай ҡолаҡҡа ятмағанды һөйләйһеңме? Туҡта, был нимә? - талғын ғына эшләп торған телевизорҙа һаҡалтай әҙәмде ҙур итеп күрһәтәләр. - Тауышын ас әле. Тиҙ... - Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы сабырһыҙланып, башлаған һүҙен дә әйтеп бөтә алмай, ҡыҙына төрттө.

Телевизорҙа яңылыҡтар бара. Диктор көр һәм хәүефле тауыш менән нимәлер һөйләй: "Тымыҡ океандың нейтраль һыуҙарында БМО-ның Хәүефһеҙлек Советына ингән илдәрҙең берләштерелгән көстәре махсус операция үткәрә. Хәрби караптар, палуба авиацияһы йәлеп ителгән. Ошо мәлдә данлыҡлы генетик Джон Смиттың йөҙөп йөрөгән лабораторияһы утҡа тотола. Ғалим һәм уның менән эшләгән барлыҡ белгестәр, хеҙмәткәрҙәр икенсе карапҡа эвакуацияланған".

- Ул! - Әсәһе ҡыҙының ҡулына сытырман йәбеште.

- Кем? - Фариза ла ҡурҡыуға төштө.

- Төшөмә ингән һаҡалтай.

Диктор артабан дауам итте. "Джон Смиттың тәжрибәләре тураһында киң йәмәғәтселек бер ни белмәһә лә, махсус органдар уның ғилми эшмәкәрлеген даими күҙәтеп барған. Кеше геномын уңышлы үҙгәртеүе, тәүге атәстең тыуыуы менән (колбала яралған аҡыллы заттарға Смит үҙе шулай исем биргән) Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тәүәккәл саралар күрә башланы. Ғалим билдәле ҡануниәт нормаларын боҙоп ҡына ҡалмай, ә кешелектең киләсәгенә балта саба, уның әхләҡи нигеҙҙәрен тарҡата, бөтөнләйгә юҡ итә".

Һүҙҙе Смиттың үҙенә лә бирҙеләр: "Эйе, мин аңлы рәүештә ҡануниәтте боҙоуға барҙым, - тине ул. - Был - ике йөҙ мең йыл элек еңеүле үҫешен башлаған аҡыллы заттың үҙен, ул туплаған белемде һаҡлап алып ҡалыу өсөн эшләнгән аҙымым. Кешелек үҙ үҫешенең сигенә яҡынлаша. Сөнки тормош ҡиммәттәренең иң түбәндәрен һайланы. Рухи үҫеш урынына, асмәйелдәй ярышып, матди байлыҡ артынан ҡыуыу юлына баҫты. Ул ғына ла түгел, енестәр араһында көсөргәнеш киҫкен фазаһына етте. Ул - атаны, ҡыҙ әсәне танымаған заман хәҙер. Донъя кимәлендәге катастрофаға күп ҡалмаған. Бөгөн мине туҡтаттылар. Ләкин идеямды күтәреп алыусылар буласаҡ, лабораториямды океан упҡыны йотһа ла, ғилми эшемдең һөҙөмтәләре ышаныслы ҡулдарға тапшырылған. Ҡулайлы ваҡыт тыуыу менән икенсе урында, икенсе кешеләр тарафынан тәжрибәләр дауам итәсәк. Теләйбеҙме-юҡмы - атәстәр ергә киләсәк".

Диктор башҡа мөһим донъя хәлдәренә күсте. Фариза йәһәтләп теливизорҙы һүндерҙе лә, әсәһенә баҡты.

* * *

Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы буталсыҡ уйҙар солғанышында оло тетрәнеү кисереп ултыра.

- Төшөмә нисек инде был әҙәм? Ҡәҙимге кеше лабаһа. Ҡөҙрәте сикһеҙ Аллаһы Тәғәлә түгел.

- Телекинез тигән нәмә бар, әсәй. Алыҫ арауыҡтан кешенең аңына, әйберҙәргә йоғонто яһай алыу һәләте.

- Һуң, Тәңренең миңә тура өндәшеүесе?

- Бәлки, Джон Смит алыҫ аранан гипнозлау һәләтенә лә эйәлер.

- Әсәнде ертаҡыл тип уйлайһың һаман.

- Башҡаса аңлатырға минең аҡылым етмәй.

- Ялбарыуҙарымсы? Ошо көндәрҙә Раббыбыҙға аҙ өндәшмәнем. Ул мине ишетте, атәстәрҙең килеүен кисектерҙе, - Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы башваткыстың сиселешен тапҡан бала кеүек шатланды. Ҡыуанысы йөҙөн яҡтыртты. - Һуң, нишләп баштан уҡ быны аңламаным? - ҡатын теҙләнеп, ҡулдарын өҫкә күтәрҙе. - Эй, мәрхәмәтлеләрҙән мәрхәмәтле, ҡөҙрәтлеләрҙән ҡөҙрәтле, юҡты бар итеүсе Раббым, ҡолонд ғәфү ҡыла күр. Аңыбыҙ томаланған, маңлай күҙебеҙҙе күрәшлек шөкәрәһе ҡаплаған, күңел күҙебеҙ һиҙгерлеген юғалтҡан. Ымишаранды ҡапылғарай күрмәйбеҙ ҙә, аңламайбыҙ ҙа. Әҙәм затын тағы ярлыҡаның, харап ҡылманың. Рәхмәтебеҙ сикһеҙ, - йөҙө тамам сафланған ҡатын ҡалҡынып баҫты, күҙенән субырлап аҡҡан йәштәрен һөрттө.

- Әсәй, Аллаһы Тәғәлә нишләп был ғәмәлдәрҙе кеше ҡулы менән атҡарҙы? Атәстәрҙе яратыуҙы Смиттың иңенә һалды, уны шул уҡ кешеләр булышлығы менән туҡтатты? Үҙе юҡтан бар ҡылыусы була тороп...

- Гонаһ һүҙ һөйләйһең. Зиһенең буш һинең, ҡыҙым. Ул бит ишара ҡылды. Иманға ҡайтмаһаҡ, беҙҙе нимә көтәсәген күрһәтте. Кешенең яңылышлыҡтары тураһындағы хәбәрҙе Джон Смиттың теленә һалды. Уны төштәремә индерҙе, бөтәһен дә үҙ ҡолаҡтарым менән ишетһен, үҙ күҙҙәрем менән күрһен өсөн ошо урынға кәрәкле мәлдә алып килеп баҫтырҙы. Хоҙай Тәғәләнең ҡөҙрәтенән башҡа уны бер нисек тә аңлатып булмай. Мин үҙ бурысымды беләм хәҙер, ҡыҙым!

- Ә һин, ысынлап та, илсеһеңме, әсәй?

-Эйе, мин әүлиә, ҡыҙым! Һинең, атайың, кейәүем, ейәнейәнсәрҙәрем өсөн. Әйҙә, аш етештерә һалайыҡ, улар балыҡтан ҡайта бит оҙаҡламай. Хужалар ҡайта! Ирҙәр! Ә беҙ - ҡатындар! Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә - беҙ. Уларға бер ваҡытта ла ҡәбәхәт, тип әйтергә ярамай. Асыуҙан әйткән шул һүҙем өсөн генә бөтә кешелек яҙаға тарый яҙҙы.Шуға күрә һәр ҡатын-ҡыҙ - әүлиә. Әгәр ошоно тотһаҡ, кеше ырыуын бер ваҡытта ла атәстәр алыштырмаҫ. Ирҙәргә бер ваҡытта ла ҡәбәхәт, тип әйтергә ярамай. Асыуҙан әйткән шул һүҙем өсөн генә бөтә кешелек яҙаға тарый яҙҙы бит...

**(Аҙағы).**

✔ *Әхмәтбаҡый хәҙрәт Үрген ауылының хәлле кешеһе булған. Ләкин ул хәләл көсө менән йәшәүе, ҡомһоҙ, һаран булмауы менән тирә-яҡтағы башҡа байҙарҙан ҡырҡа айырылып торған.*



ИНТЕРНЕТТАН



# НАСАР ЙОҠО...
## йөрәккә зыян итә

■ Насар йоҡо йөрәккә зыян килтерә. Белгестәр уны йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары хәүефен тыуҙырыусы факторҙар исемлегенә индергән. Төнөн ете сәғәт йоҡлау - йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртеүсе яҡшы сара булып тора, тик йоҡоға тағы ла дөрөҫ тукланыу, физик әүҙемлекте өҫтәргә, тәмәке тартыу кеүек насар ғәҙәттәрҙе алып ташларға кәрәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, яҡшы итеп йоҡлау йөрәк ауырыуҙары үҫеше хәүефен - 65, ә был сирҙәрҙән үлеү осрағын 83 процентҡа кәметә, тип иҫәпләй Нидерландтың Йәмғиәт һәм тирә-яҡ сәләмәтлеге милли институты ғалимы Моник Вершурен. Өс йыл дауамында 8128 ир-егет һәм 9759 ҡатын-ҡыҙҙы тикшереп, физик әүҙемлек, диета, алкоголь һәм тәмәкене ҡулланмау, төнгө яҡшы йоҡо сәләмәтлек нигеҙе икәнлеге асыҡланған. Әйткәндәй, йоҡо психикаға ла яҡшы йоғонто яһай - мәсәлән, суицидҡа ынтылышты кәметә.

■ Бөтнөк - универсаль продукт, ти белгестәр. Уны аш-һыу әҙерләгәндә лә, сәләмәтлек өсөн дә ҡулланырға була. Баш ауыртҡанда, үҙегеҙҙе насар тойғанда йәки дөйөм тонусты күтәреү өсөн бөтнөк майы менән сикәләрҙе ышҡырға була. Ревматизм йонсотһа, бөтнөк төнәтмәһе өҫтәлгән ванна инегеҙ. Бөтнөк майы менән эшләнгән ингаляциялар һалҡын тейгәндә ярҙам итәсәк.

■ Сан-Франциско университеты ғалимы Сара Холли белдереүенсә, 60 йәште үткән парҙарға ғаилә ыҙғыштарын нисек тә булдырмау күпкә файҙалыраҡ. 13 йыл дауамында 127 ғаилә парын өйрәнеп, тикшереүсе шундай һығымтаға килгән: ни тиклем өлкәнәйә барған һайын, парҙар ғаиләлә позитив тонда аралаша, конфликтлы ситуацияларҙан ҡаса һәм бының менән үҙҙәрен бәхетлерәк тоя.

■ Бөйөк Британияла рахит һәм зәңге менән сирләүсе балалар һаны арта. Британия медиктары бында дөрөҫ булмаған тукланыу ғәйепле икәнлеген күптән билдәләгән. Ярымфабрикаттар һәм фаст-фуд ризыҡтары үҫеүсе организмды кәрәкле матдәләр менән тулыландыра алмай, ти Британия медицина ассоциацияһы рәйесе Марк Темпл. Ә бөгөн балалар йышыраҡ ошондай аҙыҡ менән туҡланырға мәжбүр. Кальций һәм D витамины етешмәү сәбәпле, балаларҙың һөйәктәре йомшара, рахит ауырыуы үҫешә башлай. C витамины дефициты зәңге сиренә килтерә. Һуңғы 100 йыл эсендә аҙыҡ-түлек ассортименты бер нисә тапҡыр артһа ла, кешеләрҙең туҡланыу рационы элекке замандарҙағы кеүек ярлы, ти диетолог Шинэд Куирк. Бөйөк Британияла икенсе урында балалар араһында һимереү проблемаһы ла актуаль булып ҡала.

■ Замана технологиялары замана сирҙәрен тыуҙыра. Мәсәлән, Америка белгестәре аллергияның яңы төрөн теркәгән. Wi-Fi үткәргесеһеҙ селтәргә булған аллергия билдәләре башҡа аллергия төрҙәренән бер нәмәһе менән дә айырылмай. Баш ауыртыуы, быуындар һыҙлауы, күҙҙәрҙең ҡороуы йәки йәшләнеүе, тамаҡ ҡымырйыуы - ошо билдәләр менән табиптарға мөрәжәғәт итеүселәр арта бара. Улар менән һөйләшкәндән һуң, ауырыуҙарҙың Wi-Fi зонаһында күп ваҡыт уҙғарыуы асыҡланған. Бында барыһы ла был үткәргесеһеҙ селтәрҙең микротулҡынлы мейес менән бер тулҡында эшләүе сәбәпсе. Заман технологияларының зыянлы тәьҫиренән һаҡланыу өсөн табиптар йышыраҡ тәбиғәткә сығырға кәңәш итә.

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК



# ТУҠСАБА ОРАНЛЫ ШӘХЕС...
## Әхмәтбаҡый хәҙрәт тураһында

### Исмәғил Аҡъюлов һөйләгәне

Әхмәтбаҡый хәҙрәттең дүртенсе быуын туғаны Ейәнсура районы Үрген ауылының аҡһаҡалы, бөгөнгө көндә Күмертау ҡалаһы, Маячный ҡасабаһында йәшәгән хаҡлы ялдағы уҡытыусы Исмәғил Аҡъюлов әйтеүенсә, совет осоронда атеизм бик көслө була, дин, доғалар, им-том ярҙамында кешеләрҙе дауалаусыларға ҡаршы ныҡлы көрәшкә күтәрелгән замандарҙа шундай илаһи ҡөҙрәткә эйә булған Әхмәтбаҡый әүлиә тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләү тыйыла. Хөкүмәт, Коммунистар партияһы бөтә урындарҙа муллаларҙы, дин әһелдәрен туранан-тура тәнҡитләй, мәктәптәрҙә атеистик тәрбиә көслө бара. Йыйылыштарҙа намаҙ уҡыған, ураҙа тотҡан, Аллаһы Тәғәлә тураһында һөйләгән кешеләрҙе һәр саҡ әҙәрлекләп, фашлап, төрлөсә ҡыҫым яһайҙар. Ураҙала, ауыҙ асҡанда, ғәҙәттә, ауыл буйлап тикшереп йөрөүсе комсомолдар кҿҙенә салынмаҫ өсөн тәҙрәләр одеял менән ҡаплана.

1980 йылда Исмәғил ағай "Запорожец" машинаһы алып ебәрә лә Мораҡ аша тыуған ауылы Үргенгә ҡайтып бара. Юл буйында бер мосафирҙы осратып, машинаһын туҡтата. Күгәрсен районына ҡайтып барыусы өшөп-туңып бөткән юлсыны Исмәғил ағай, бер аҙ ҡурҡа төшһә лә, йәлләп ултыртып ала. Оҙон юлда әңгәмәләшеп бара торғас, юлсы илһамланып китеп Әхмәтбаҡый әүлиәнең яҡшылыҡтары, тылсымлы ҡулдары, ҡөҙрәте тураһында һөйләй һәм уның фатиһаһын алыуы тураһында әйтә. Уның һөйләүенсә, бер ваҡыт атаәсәһе ҡорһаң ашына кешеләр йыйған ваҡытта иң ҡәҙерле ҡунаҡ итеп Әхмәтбаҡый хәҙрәтте саҡыра һәм уларына ҡунаҡтарҙың ҡулдарын йыуҙырырға ҡуша. Хәҙрәттең ҡулдарын ашар алдынан һәм ашағандан һуң да йыуҙырғас, ул йәш үҫмергә былай тип әйтә: "Һин, улым, сауаплы эш эшләнең, тормош юлың уң булыр", - ти. Артабан ул егет булып үҫеп килгән сағында һауала сәмәрле яҙыу күреүен, кешеләрҙең атҡа тейәлешеп, әүлиәнең зыяратына китеүҙәрен һөйләй. Дүрт йыл һуғышта йөрөүгә ҡарамаҫтан, был ағайға бер пуля ла теймәй һәм ошо йәшкә етеп, бер ере ауыртып, больницаға аяҡ баҫҡаны ла юҡ икән. Ошоноң менән юлсы Әхмәтбаҡый әүлиәнең фатиһаһының ни тиклем көслө икәнен билдәләй.

### Ул балаларҙы яратҡан

**Хажиҙы бала сағында күреп-белгән Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Фәйзулла Ураҡбаев һөйләй:** Әхмәтбаҡый хажи балаларҙы бик яратыр ине. Яландар сәскәгә күмелгәс, беҙҙе тапалмаған урындарға алып барып, сәскә һәм үләндәрҙең ниндәй сирҙән шифалы икәнен, уларҙы нисек йыйырға һәм нисек киптерергә кәрәклеген өйрәтер ине. Әлбиттә, үләнде ул үҙе лә йыя алыр ине, ләкин беҙҙе эйәртеүе үлән дауаһы серҙәрен йәш быуынға өйрәтеп ҡалдырыу ниәтенән булғандыр. Етмәһә, бигерәк бала йәнле, үҙе мәрәкәсел, йор һүҙле, шундай йомарт ине. Тәм-том, татлы ризыҡтар менән һыйлап ҡына ҡалмай, өйгә лә биреп ҡайтара торғайны. Үләндән яһаған дарыуҙары бик килешә ине хәҙрәттең.

Атайҙар һөйләүенсә, Әхмәтбаҡый хәҙрәт Үрген ауылының хәлле кешеһе булған. Ләкин ул хәләл көсө менән йәшәүе, ҡомһоҙ, һаран булмауы менән тирә-яҡтағы башҡа байҙарҙан ҡырҡа айырылып торған. Хеҙмәтселәре ул ашағанды ашап, ул кейгәнде кейер булған һәм ул тапҡан аҡсаһын бер ваҡытта ла йәшереп һаҡламаған, иҙәнгә түшәлгән кейеҙ аҫтында тимер, ҡағыҙ аҡсалар тулышып ятҡан һәм һәр береһе үҙенә кәрәккәнсә алып тотонор булған. Ләкин береһе лә хәрәмләшмәгән, үҙ-ара ыҙғыш сығармағандар. Эште бер ата балаларылай һәр кем үҙе белеп, тыныс ҡына эшләр булған.

### Етемдәрҙе ҡурсалауы тураһында

Әхмәтбаҡый Фәхретдиновтың ҡайҙа осратһа ла ҡараусыһыҙ ҡалған үкһеҙ етемдәрҙе атына ултыртып алып ҡайтып, үҙ балаһылай тәрбиәләп үҫтереүе ғәҙәти күренешкә әйләнеп бөткән. Үҫтереп, уҡытыу менән бергә, буй еткергәс, Әхмәтбаҡый хәҙрәт етемдәрҙең береһен дә ел-ямғыр тейҙермәйенсә, башлы-күҙле итеп, урын-еренә еткереп туйҙар яһаған һәм һәр ҡайһыһына айырым өй һалып биреү менән бергә, малтыуар, бөтә кәрәк-яраҡтарын, батманлап балын, майын тейәп, башҡа сығарған.

Шулай бер ваҡыт Ерекле ауылы аша Шәмиғол мулланан ҡайтып килгәндә урамда ыштанһыҙ ултырған Хәйретдин исемле етем малайҙы күреп ҡала ла, йәлләп, атына ултыртып алып ҡайта һәм ҡарап үҫтереп, кәләш алып бирә.

Мирасова Минжиһан апай бер нисә сәғәт буйына ҡайныһы Ғиниәтулла менән ҡәйнәһе Мәһинур һөйләгәндәрҙе иҫенә төшөрөп һөйләп ултырҙы. Әхмәтбаҡый хәҙрәт уларҙы ла бөләкәй генә саҡтарында, атай-әсәйҙәре, бөтә туғандары аслыҡтан үлеп бөткәс, Бикбирҙе ауылынан алып ҡайтып, аҫырап үҫтергән. Шунан өйләндереп, бер башмаҡ, бер тай биреп, башҡа сығарған.

Совет заманы килгәс, ауылдағы мәсетте боҙоп алып китәләр. Түрәләр ҡушыуы буйынса, бер ағай уның манараһын менеп емерә. Шул саҡта үҙәк өҙөрлөк илау тауышы сыңлай. Аҙаҡ, Әхмәтбаҡый әүлиә вафат булып, донъялар тынысланғас, Минжиһан апайҙың ҡайныһы ошондағы мәсет урынына йорт төҙөп керә. Ошондағы әүлиә үҙ ҡулы менән ултыртҡан ағастарҙың күбеһе хәҙер юҡ инде, ишек алдындағы ҡоҙоҡтоң да урыны ғына һаҡланған. Ә күршелә Әхмәтбаҡый хәҙрәт йәшәгән йорт урынына Хәлилов Хәйретдин ҡатыны Бәҙиға менән Ерекле ауылынан күсеп ҡайтып, йорт һалып инәләр. Уларҙың килене Сәриә Хәлилова ҡайныһы менән бейемәнән ишетеп-белгәндәрен һөйләп ултырҙы. Уның һөйләгәндәре Әхмәтбаҡый мулланың изгелеклелек, тырышлыҡ, уңғанлыҡ, ғәҙеллек, йомартлыҡ кеүек матур сифаттарын тағы ла бер тапҡыр раҫланы. Ул Әхмәтбаҡый хәҙрәттең ҡайныһары өйләнгәндә май тултырып биргән 20 килограмм ауырлыҡтағы батманын күрһәтте. Әүлиәнең өшкөрә торған өйөнә йәйелгән ап-аҡ кейеҙ киҫәктәрен дә ҡәҙерләп һаҡлай ине Сәриә Хәлилова.

### Хәҙрәттең ҡатындары тураһында

Бер ваҡыт Әхмәтбаҡый хәҙрәт беренсе ҡатыны менән бергәләп мәзине Мөжиғулла Акчуринға Ибрай ауылына кәләш әйттерергә бара. Шул саҡ ҡатыны үҙенең күптән уйлап йөрөгән теләген Әхмәтбаҡый хәҙрәткә әйтеп бирә. Ошо ауылда ҡоҙа тейешле кешеләрҙең эшкә тырыш сибәр генә ҡыҙын йәмәғәтенә икенсе ҡатынлыҡҡа алырға тәҡдим итә. Шулай итеп, улар бер юлы ике ҡуяндың ҡойроғон тотоп ҡайталар. Мөжиғулла оҡшатҡан ҡыҙҙы ла яусылайҙ-

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Июль | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23, шишәмбе | 4:13 | 4:43 | 14:30 | 21:01 | 22:31 | 00:01 |
| 24, шаршамбы | 4:14 | 4:44 | 14:30 | 20:59 | 22:29 | 23:59 |
| 25, кесе йома | 4:16 | 4:46 | 14:30 | 20:58 | 22:28 | 23:58 |
| 26, йома | 4:18 | 4:48 | 14:30 | 20:56 | 22:26 | 23:56 |
| 27, шәмбе | 4:19 | 4:49 | 14:30 | 20:54 | 22:24 | 23:54 |
| 28, йәкшәмбе | 4:21 | 4:51 | 14:30 | 20:53 | 22:23 | 23:53 |
| 29, дүшәмбе | 4:23 | 4:53 | 14:30 | 20:51 | 22:21 | 23:51 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

***✓ Иғтибар туплауҙың һөҙөмтәле ысулы булып аҙымдарҙы һанау тора. Алты аҙым атлағанда тын алығыҙ, артабанғы алты аҙымды баҫҡансы тынығыҙҙы тотоп тороғоҙ, һуңынан сираттағы алты аҙымда тынығыҙҙы сығарығыҙ.***

ар. Шул уҡ ваҡытта Әхмәтбаҡый хәҙрәт ҡатыны димләгән ҡыҙҙы ла барып күрә лә, ата-әсәһе менән килешеп, мәһәрен һөйләшеп ҡайталар. Оло ҡатыны менән бергәләп башҡорт йолаһы буйынса әҙерләнеп, бүләктәр таратып, әллә нисәмә йылҡы, һарыҡ һуйып, бөтә ауылды шаулатып туй үткәрәләр. Бында шуны өҫтәп әйтке килә: хәҙерге йәштәр күп ҡатынлылыҡ йолаһын һанламай, унан хатта ниндәйҙер ғәйеп эҙләргә тырыша. Ә әлеге миҫалда шул асыҡ күренә: хәҙрәт ҡатынының ризалығы, хатта тәҡдиме менән, бергәләшеп дуҫ һәм татыу донъя көтөү, оло хужалыҡты алып барыу, балалар үҫтереү өсөн ошо йолаһы үтәй. Мулла ҡалған ҡатындарына ла бөтә ғаилә ағзалары менән үҙ-ара кәңәшләшеп, һөйләшеп, ризалыҡ менән өйләнгән һәм уларҙың барыһын да тиң ҡараған, һәр береһенә йорт һалып биргән. Бәлғизә, Менәүәрә, Зөһрә, Ғәбиҙә исемле дүрт ҡатыны үҙ-ара апалы-һылыулы һымаҡ бик татыу һәм сабыр булыуҙары, йорт, хужалыҡ эштәрен берҙәм алып барыуҙары яғынан тирә-яҡҡа өлгө булып торғандар. Эҙләнеүҙәрем барышында әүлиәнең Әхмәтдин, Хәйбулла, Ғәбиҙә, Әхмәт, Зөһрә, Сәғит исемле алты балаһынан 11 ейәнсәре, 14 бүлә-бүләсәләре барлығы асыҡланды.

## Әүлиә дауалары

Табип түгел, фельдшер ишараты ла булмаған заманда һәр төрлө сирҙән һауыҡтырған хажиға яҡын-тирәнән дә, алыҫ-алыҫ төбәктәрҙән дә сирлеләр көнөн-төнөн ағылған. Әхмәтбаҡый хәҙрәт ҡоторған кешеләрҙе, шәкәр ауырыуы менән ауырығандарҙы ҡайһы ваҡытта килһәләр ҙә бороп сығармаған, дауалап ебәргән. Мәҫәлән, йылан саҡҡан кешеләрҙе өшкөрһә, теге йылан үҙе әүлиә янына килер һәм шунда ятып йән бирер булған. Кешеләрҙең ниндәй ауырыуға тарыуын хәҙрәт үҙе белеп торған. Үлән менән дауалауҙан тыш, тоҙ менән дә өшкөргән, гипноз ярҙамында һауыҡтырған, быуындарҙы ултыртҡан, имләгән. Хатта уның сихри, тылсымлы көскә эйә булыуын белгәндәр. Был турала мәҙәк кенә итеп һөйләйҙәр. Шулай бер ваҡыт әүлиәнән:

- Һин күҙ бәйләй беләһеңме? - тип һорайҙар.

- Эйе, - тигән ул. - Күрһәтәйемме? Күҙегеҙҙе йомоғоҙ һуң улай булғас.

Бөтәһе лә бер юлы күҙҙәрен йомғандар былар. Шунда ул аҡрын ғына:

-Хәҙер күҙҙәрегеҙҙе асып, анау ҡаршылағы Мәмерйә тауына ҡарағыҙ, нимә күрәһегеҙ?- тигән.

Бөтәһенең дә ғәжәпләнеүҙән күҙҙәре дүрт булған, сөнки мәмерйәнән ялтырап торған йылҡылар ағымы сыға ла сыға, ти. Шунан хәҙрәт быларҙан:

-Нимә күрҙегеҙ?- тип һораған.

Бөтәһе лә береһен-береһе уҙҙырып, йылҡы көтөүе күреүҙәрен әйткән. Артабан әүлиә быларға яңынан күҙҙәрен йоморға ҡушҡан. Яңынан күҙҙәрен асып ҡарағанда алда бер йылҡы ла юҡ, әлеге Мәмерйә тауы ғына ҡалҡып тора, ти. Уның ошондай төрлө кирәмәттәрен Хөсниямал апайға атаһы Сәйфетдин (Әхмәтбаҡый хәҙрәттең ике туған ағаһы) һөйләй торған була.

Әхмәтбаҡый әүлиәнең икенсе ҡатыны Менәүәрә лә халыҡ медицинаһын яҡшы белә, үләндәрҙән төрлө дарыуҙар эшләй, ауырып килгән кешеләрҙе тәрбиәләй, ашатып-эсерә. Әүлиәнең өйө янында уның үҙ ҡулдары менән ҡаҙыған ҡоҙоғо була. Хәҙрәт ауырыған кешеләрҙе ошо ҡоҙоҡтан алынған һыуҙы өшкөрөп дауалай. Дауалаған өсөн бер ваҡытта ла хаҡ һорамай, киреһенсә, ярлы-ябаға килһә, ризығын, аҡсаһын, кәрәк-ярағын көсө еткәнсе тейәп ебәрә. Киләсәк кешеләр тураһында алдан белгәнгә күрә, хеҙмәтселәренән тиҙ генә һарыҡ салдырып, ҡаҙан тултырып ашын бешертә, мунсаһын яғып ебәрәләр. Көнөнә унар һарыҡ һуйҙырған саҡтары була уның.

## Совет власына ҡаршы бармай

Заманалар үҙгәреп, динде инҡар итеү, мәсеттәрҙе юҡҡа сығарыу башлана. Әммә Әхмәтбаҡый хәҙрәт үҙе лә совет власына ҡаршы бармаған, биш балаһына ла яңыса йәшәргә кәңәш иткән. Уларҙы: "Яңы власҡа ҡаршы бармағыҙ", тип иҫкәртеп ҡуйған. Шуға бөтә балалары ла атаһын тыңлап, яңы тормошҡа ылығырға, яңы власҡа ярарға тырышҡан. Әхмәтбаҡый хәҙрәттең бөтә балалары ла уҡымышлы булған.

Иң оло улы, Хәйбуллаһы, ауылда совет мәктәбе эшен юлға һалып ебәргән иң беренсе уҡытыусы була. Уны Ырымбурҙа педагогия техникумында уҡыған саҡта, мулла балаһы, тип, уҡыуҙан ҡыуырға булалар. Шул саҡта ул атаһының кәңәше буйынса эшләй: атаһынан баш тартыуы тураһында белдерә һәм шулай ҡотолоп ҡала. Икенсе улы Әхмәт тә һуғышҡа тиклем Каруанһарайҙа уҡый, алдынғы уҡытыусы була. Һуғыштан һуң әпкәләйҙәр ошағы арҡаһында ерле юҡҡа ғына Сталин золомоноң 10 йыллыҡ һурпаһын татып ҡайта. Әхмәт төрмәлә лә ваҡытты бушҡа уҙғармай, ундағы китапханаһының бөтә китаптарын уҡып сығып, белеме менән профессор кимәленә күтәрелә, үҙе бер аяҡлы энциклопедияға әйләнә. Ләкин ошондай ҙур белемле Әхмәтте төрмәнән ҡайтҡас яратҡан эшенә алмайҙар, ҡалған ғүмерендә янғын һүндереүсе булып эшләргә мәжбүр була. Ғөмүмән, Әхмәтбаҡый хәҙрәттең һәләттәре ҡан буйынса нәҫел-нәсәбенә күскән, сөнки уларҙың күптәре уҡымышлылар, атҡаҙанған уҡытыусылар, табиптар һәм фән кандидаттары - кемдәр генә юҡ араларында! Уларҙың һәр береһе тураһында айырым һөйләргә булыр ине. Ләкин минең маҡсат - ошо бөйөк әүлиә турһындағы һүҙҙе башлап ҡына ҡуйыу ине.

## Уның рухы һаҡлай

Әхмәтбаҡый әүлиәнең рухы ауылды һаҡлап тора, тигәнгә инанған яҡташтары. Мәҫәлән, 1937-1938 йылдағы репрессия ваҡытында ауылдан берәүҙе лә ҡулға алмайҙар. Быны изге әүлиәнең ярҙамы менән аңлата ауылдаштары. Хажи тураһында мәғлүмәттәр йыйып, бай материал туплау, эҙләнеү эшен үтә лә яуаплы итеп ойоштороусы Үрген ауылы мәктәбе директоры Юлай Солтанбаев фаразлауынса, Әхмәтбаҡый әүлиә бөтә һөжүмде үҙенә алып, кеше аңы етмәгән ысулдар менән ауылдаштарын бәләнән ҡурсалап ҡалған.

2010 йылдың 1 июлендә Үрген ауылында йәнтөйәк тарихына битараф булмаған хаҡ мосолмандар ҡатнашлығында оло ғәмәл атҡарыла: мәшһүр дин әһеле, мәғрифәтсе, белемсе Әхмәтбаҡый хәҙрәттең тыуыуына 150 йыл тулыуға арналған хәтер һәм ҡәҙер кисәһе үткәрелә. Ошо саранан һуң өс ай буйына яуым-төшөм күрмәгән ер өҫтөнә ямғыр яуыуы үҙе бер мөғжизә була. Ләкин мөғжизә ямғыр менән генә бөтмәй: күктә аҡ болоттарҙан яҙыуға оҡшаш семәр барлыҡҡа килә. Унан Көйөргәҙе районының имам-хатибы Азат Хәлилов ошондай яҙыуҙарҙы уҡый: "Лә илләәһә илләәлләһу" .

**Нурия ХӘЛИЛОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**
**Күмертау ҡалаһы.**
**(Аҙағы. Башы 28-се һанда).**

### *ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Балаларҙы йыһан энергияһына тоташтырыу

Әммә төп эшмәкәрлек икенсе йүнәлештә барҙы: миңә балаларҙы йыһан энергияһына тоташтырыу мөмкин булды. Бының өсөн педагогикала революция яһарға тура килде. Барлыҡ предметтарҙы ла мәғариф киңлегенең ситенә ҡыҫырыҡлап, физкультуранан культ предметы яһаным. Ҡышын да, йәйен дә, көҙөн дә, яҙын да тәнде һәм рухты үҫтереү өсөн тотош синыф уҡыусылары урамға сыҡты. Шәхсән етешһеҙлектәрем менән аяуһыҙ көрәш йылдарында тупланған аҡылым мине замандың иң яҡшы педагогы яһаны. Был хаҡта берәү ҙә уйлап та ҡараманы, әммә мин уның шулай икәнен белдем. Был ваҡытҡа организмымды Ҡояш системаһы кеүек итеп көйләгәйнем. 8.10 сәғәттә өйҙән сыға һәм 8.40 сәғәттә мәктәп ишеген аса торғайным. Миңә ҡарап сәғәттәрҙе дөрөҫләргә мөмкин ине. Был йәһәттән мин Иммануил Кантты ла уҙып киттем: ул үҙен яҡшы хәләттә тотоу өсөн даими рәүештә кешеләрҙә мохтажлыҡ кисергән: һәр көн яҡын дуҫтары өсөн төшкө аш ойошторған. Кант аңлатып булмағанды аңлатырға тырышҡан, ә миңә аңлатып тороу мотлаҡ түгел һәм кәрәкмәй ҙә ине. Мин боронғо Ҡытайҙар юлынан киттем: иң яҡшы еңеүсе - ул үҙ-үҙен еңеүсе. Әммә мин берәүҙе лә еңмәнем, бары тик йәшәнем. Үҙем генә түгел, ә ике тиҫтә бала араһында йәшәнем. Бик йыш мин дә улар кеүек инем, ләкин уларҙың һәр береһе айырым осраҡтарҙа уҡытыусының саманан тыш ҡәтғи һәм талапсан булыуын белеп торҙо. Был ваҡыттарҙа мин билдәһеҙ юғары көс - Дао исеменән сығыш яһаным һәм ҡаты күңеллегә әйләндем, сөнки йыһан ҡанундары наҙлылыҡтың һәм йәлләүҙең нимә икәнен белмәй. Тап шулай ҡатылыҡ менән генә кешелек йәшәйешенең йәшерен ҡанундарын аңларға, бәләкәй кешене ҡайнап торған тормош диңгеҙендә йөҙөргә өйрәтергә мөмкин.

Тотош синыф көнөнә ике тапҡыр, һауа торошоноң, аҙнаның ниндәй көнө булыуына ҡарамаҫтан, футбол уйнарға сыҡты. Беҙҙең гимназия аморф ине. Сентябрҙә һәм майҙа балалар шәмбе көн уҡыманы. Был уларҙы илке-һалҡылыҡҡа өйрәтте һәм башҡа айҙарҙа ла күпселек уҡыусылар шәмбе көн уҡыуға йөрөмәне. Байрамдар алдынан барыһы ла ҡыҫҡартылған программа буйынса уҡыны. Әммә беҙ бер ваҡытта ла быңдай өҫтөнлөк менән файҙаланманыҡ. Ныҡ һыуыҡ булған көндәрҙә мәктәп тынып ҡала ине - минең синыфымдан башҡа берәү ҙә уҡыманы. Күп йылдар мәктәптә эшләү дәүеремдә синыфым ни бары өс кенә дәрес ҡалдырҙы. Ул ваҡытта беҙ республика олимпиадалары еңеүселәре алдында концерт программаһы менән сығыш яһаныҡ.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**

### *УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Икенсе көн

**Беренсе күнекмә: "Янып тороусы майшәм"**

Тыныс һәм үҙегеҙ генә булған ваҡытта ярымҡараңғы бүлмәлә майшәм яндырығыҙ. Янып тороусы майшәмгә мөмкин булған тиклем оҙағыраҡ һәм күҙҙәрегеҙҙе йоммайынса ҡарағыҙ. Ялҡындың формаһын, уның текстураһын, хәрәкәтен өйрәнегеҙ. Ялҡынды иғтибар үҙәгенән ысҡындырмағыҙ - әгәр иғтибарығыҙ саҡ ҡына ситкә китә икән, уны матур ғына итеп кире урынына ҡайтарығыҙ һәм матур итеп, илһам өҫтәп, янған ялҡын теленә иғтибар туплағыҙ. Был күнекмәне даими башҡарғандан һуң яйлап ҡына иғтибар туплауығыҙ тәрәнәйә барыр һәм һеҙ бер нәмәгә бүленмәйенсә, тейешле объектҡа оҙаҡ иғтибар туплай аласаҡһығыҙ. Шулай уҡ үҙегеҙҙе тынысыраҡ тойорһоғоҙ һәм ваҡ мәсьәләләр һеҙҙе артабан борсомаясаҡ.

**Икенсе күнекмә: Аҙымдарҙы һанау**

Фекерләүҙең һәм иғтибар туплауҙың иң һөҙөмтәле ысулдарының береһе булып аҙымдарҙы һанау тора. Процедура бик ябай, әммә һөҙөмтәләр иҫ киткес буласаҡ. Алты аҙым атлағанда тын алығыҙ, артабанғы алты аҙымды баҫҡансы тынығыҙҙы тотоп тороғоҙ, һуңынан сираттағы алты аҙымда тынығыҙҙы сығарығыҙ. Был циклды даими ҡабатлағыҙ һәм аҙымдарҙы һанауҙан туҡтамағыҙ.

**Икенсе бүлек: тән. Күнекмәләр көсө**

Күнекмәләр программаһын бөгөн үк башлағыҙ һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына иғтибар туплағыҙ. Әгәр һеҙ быға тиклем күнекмәләр үтмәһәгеҙ, саф һауала уртаса тиҙлектә ун биш минутлыҡ прогулканан башлағыҙ. Әгәр быға са күнекмәләр тәжрибәгеҙ булһа, ниндәй генә спорт менән шөғөлләнһәгеҙ ҙә улар менән ғәҙәттәге ваҡыттан һуң өҫтәмә рәүештә 15 минут шөғөлләнеүҙе ҡағиҙә итеп алығыҙ. Бының сере ябай: тәнегеҙҙе уяу тотоу, уны ҡуҙғатыу кәрәк. Әгәр һөҙөмтәгә өлгәшергә теләһәгеҙ, физик күнекмәләрҙе артабанғы 28 көн дауамында эшләгеҙ.

**Өсөнсө бүлек: характер. Изгелек көсө**

Ваҡыт үтеү менән яйлап һәм тигеҙ рәүештә характерығыҙ формалашасаҡ. Көндәлек артыҡ булмаған тырышлыҡ иҫәбенә ул яңы формаға эйә буласаҡ һәм йәшәү көсө, йәшәү энергияһы менән туласаҡ. Бөгөн кисә үҙегеҙҙең характерығыҙҙы яҡшыртыуға ҡуйған маҡсаттарығыҙҙың береһе хаҡында уйланығыҙ. Ни өсөн был яңы сифаттың һеҙҙең өсөн мөһим икәнлегенә аныҡ нигеҙләү табығыҙ һәм уға өлгәшеү өсөн нимә эшләргә кәрәклеген асыҡлағыҙ. Иң ҡиммәтле сифаттарҙың береһе - башҡаларға ҡарата изгелекле булыу. Тирә-яғығыҙҙағыларға изгелекле һәм иғтибарлы булыу һеҙгә, һис шикһеҙ, бәхет тойғоһон һәм кешеләрҙең ихтирамын килтерер. Көнөгөҙҙө башҡаларға изгелеклерәк һәм иғтибарлыраҡ булыу ниәтенән башлағыҙ. Һуңынан һәр мәлендә башҡаларға изгелек ҡылыуға иғтибар туплап үткәрәсәк матур көнөгөҙҙө күҙаллағыҙ. Был ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтерегеҙ һәм улар мотлаҡ тормошҡа ашасаҡ.

**Робин ШАРМА.**



## 22 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 Другие новости.
14.25 "Понять. Простить" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Проспект Бразилии". Сериал (16+).
16.10 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+).
17.00 "Женский доктор-2". Сериал (16+).
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Выхожу тебя искать-2". 5-я и 6-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (+16).
24.00 "Следствие по телу" (16+).
00.55, 03.05 "Сак и Ларри: пожарная свадьба" (16+).
03.00 Новости.
03.10 "Ночь с Бет Купер" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
